ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18
февраль
(шаҡай)

2022
№6 (996)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Уның бөрөләренең береһемен



6

Атайымды халҡы баһалай - тимәк, ул юҡҡа йәшәмәгән!



8-9

Уның һабаҡтары онотолмай



11

Хәтирәләрҙән өҙөктәр



12-13

ТВ-программа 14

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 1 февралдән 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән - 739 һум 98 тингә ваҡытынан алда яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*МИНЕҢ РӘМИ*

## ИЛАЙ БӨГӨН ФЕВРАЛЬ БУРАНЫ...

Бурап яуған февраль ҡарҙарында
Талпынды ла саңҡып бәрелде бит
Ғорур бөркөт ғорур ҡаяға.
Тоғроларҙан булды ул тоғрораҡ,
Саяларҙан булды саяраҡ.

Тыуҙы ошо февраль ҡуйынында,
Ауҙы ошо февраль көртөнә.
Йүрүҙәне ҡалтыранып сатнай,
Янғантауы янып көрһөнә.

Боҫоп йәшәр күпме төлкөнө ул
Күләгәһе менән өркөттө.
Ниңә бынау февраль буранында
Ҡанаттары янды бөркөттөң?

Ҡанаттары янды,
Йөрәккәйен
Баҫманымы ошо боҙ һауа?
Боҙ һауанан янған йөрәгенә
Тик тоҙ тама,
Тик тоҙ, тоҙ тама.

Түшәп китте ерҙең яраһына
Февраль еле йылы ҡарҙарҙы.
Февраль үҙе ниңә яҙға тартып,
Үҙе күрә алмай яҙҙарҙы?

Өрмәк булһа ла бит бөгөнгө көн
Биттәремә гүрҙең һалҡынын,
Ишетәм бөгөн гөрләүектәр шауын,
Тоям барыбер бөгөн яҙ тынын.

Бөрө кеүек ҡапыл асылдың һин,
Тамсы булып ҡапыл иренең.



Яҙ көнө ул һәр кем яҙҙы маҡтай,
Һин ҡыштарын күрҙең бөрөнө.

Был донъянан һинең китеүҙәрең
Йөрәгемде йөҙгә тураны.
Ҡәбереңә май сәскәһе һибеп,
Илай бөгөн февраль бураны.

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**
**1977 йыл, февраль.**

## ШИҒРИӘТТЕҢ МИЛЛИ ҠАҺАРМАНЫ

Йырлы һүҙҙең милли ҡаһарманы,
Умырзая кеүек юғалдың...

Юғалманың - халыҡ күңеленә
Мәңгелеккә юҫыҡ юл алдың.

Телдә - китек, илдә кәм инек беҙ,
Кеше булып тыуҙыҡ, һин тыуғас.
Эңер ине ян-яҡ, Рәмиебеҙ,
Көндө көн тип тойҙоҡ, һин тойғас!

Башҡорт рухы, халыҡ уй-хисенең
Нурсәскә һин сәйләнгөләндә,
Салауат менән ҡатар батыр булып
Торорһоң һин илдең түрендә!

Ил түрендә - Уралында мәрттә,
Барлы-юҡлы ине башҡортом...
Һинән һуң ул - илен, телен тойор,
Үҙен ҡабат ҡойор баш ҡотом.

"Егет йырлар - ҡыҙҙар йыр башлаһа,
Уянасаҡ милләт, үлмәҫ ул!"
Бөгөн күрәм: халҡым үҙен түгел -
Һүҙенде лә ергә күммәҫ ул.

Берәгәй башҡортомда берәм-берәм
Батырлыҡтар шыта, баш ҡоҫа:
Бахырлыҡтар башҡаларға батһын -
Бахыр булмабыҙ беҙ башҡаса!

Тура һүҙҙең таймаҫ ҡаһарманы,
Әй-Йүрүҙән йәме, Рәмием,
Ҡара һаҙҙа халҡым аҙашҡанда,
Таңһыҙ төндә беҙгә шәм инең.

Шиғриәттең милли ҡаһарманы,
Кеше булыуҙарҙың үрнәге,
Һин мәңгегә беҙҙең арабыҙҙа -
Юҡ һиндәрҙең, һис юҡ үлмәге!

**Рәшит ӘХТӘРОВ.**
**1987 йыл, февраль.**

*МИНЕҢ РӘМИ*

## ҺӘР МИЛЛӘТ...

### үҙенеке итте



**Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғырын бөгөн кем генә белмәй ҙә, кемдәр генә яратып яттан һөйләмәй! Кескәйҙәрҙән алып, өлкәндәргә тиклем бөтәбеҙҙең дә йөрәк һүҙенә, туған телгә һәйкәлгә әүерелде ул.**

Аңы бар кеше аңларға тейеш: был шиғыр һәр бер милләт кешеһенә, донъяла күпме халыҡ бар - шуларҙың барыһына ла ҡағыла, ә бер башҡорт теленә генә түгел. Был әҫәр, асылда, ысын мәғәнәһендә интернациональ шиғыр, уны һәр милләт вәкиле үҙенең теле хаҡында тип һөйләй һәм ҡабул итә ала. Иғтибар итһәгеҙ, бының шулай икәненә БСТ каналынан Рәми Ғариповтың тыуыуына 90 йыл тулыуға һәм Халыҡ-ара туған телдәр көнөнә арналған видеороликтар серияһын ҡарап та инанырға була: Башҡортостанда йәшәгән тиҫтәләгән милләт вәкиле һәр береһе үҙ туған теленә тәржемә ителгән ошо "Туған тел" шиғырын яттан һөйләй! Рәмиҙең был шиғырын рус та, белорус та, украин да, ҡаҙаҡ та, үзбәк тә, мари менән удмурт һәм башҡалар ҙа үҙ теленә ҡағыла тип ҡабул итә - әҫәрҙең бөтөн ҡиммәте шунда ла.

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА,**
**шағирә.**



12+

**✓ Рәми Ғариповта кешелеклек сифаттары бик көслө булған һәм бөгөн беҙ ундай кешеләргә ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Ундайҙар күп булһа, тормошобоҙҙағы күп кенә ҡиҫкен проблемаларҙан ҡотолор инек.**



ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ЗАМАН БӘЛӘҺЕ



**Һуңғы йылдарҙа берәҙәк эттәр ысын мәғәнәһендә ҙур бәләгә әйләнде. Төрлө йогошло сир таратыуы менән генә түгел. Уларҙың кешеләргә ташланыу осрағы йышайҙы. Ауылдарҙа ҡош-ҡортҡа, ваҡ малға һөжүм итеү күренештәре лә күбәйҙе.**

Был мәсьәлә, һис шикһеҙ, бөтә кимәлдәге етәкселектең, йәмәғәтселектең иғтибар үҙәгенән ысҡынмай. Илдә лә, республикала ла әйәһеҙ хайуандарҙың иҫәбен көйләүгә, халыҡтың хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә йүнәлтелгән саралар ҡабул ителә. Әммә, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әлегә файҙаһы юҡ. Бигерәк тә "Хайуандар менән яуаплы мөғәмәлә итеү тураһында"ғы Федераль закон үҙ көсөнә инеү сәбәпле ул тағы ла ҡатмарлашты. Яңы ҡанун үҙ көсөнә ингәнсе, халыҡ һорауы буйынса һәм рейдтарҙа берәҙәк эттәр атыла ине. Ә хәҙер уларҙың хәүефлеме-түгелме икәне билдәләнә лә, ҡурҡыныс тип табылһа, махсус приютҡа оҙатыла. Хәүефһеҙ тип табылһа, стерилизациялайҙар ҙа, чип ҡуйып, кире сығаралар. Былтыр ошо маҡсатта Башҡортостанда 16,7 мең берәҙәк эт тотолған, шуның 69 проценты урамға кире ебәрелгән.

Йыл әйләнәһенә Рәсәйҙең төрлө төбәгендә уларҙың кешегә ташланыуы тураһында күнелһеҙ хәбәрҙәр ишетелеп тора. Кемдер хайуандарҙы юҡ итеү яҡлы, икенселәр, киреһенсә, яҡлай. Статистиканан күренеүенсә, эттәр ҡорбанының күбеһе - балалар, ҡатын-ҡыҙҙар һәм оло йәштәгеләр. Ҡырағай тәбиғәттәге кеүек, улар ҙа иң тәүҙә көсһеҙҙәргә һөжүм итә. Ә нисек һаҡланырға һуң уларҙан?

Был һорауға үҙ йортонда тоҡомло эт үрсеткән, был хайуандарҙың холҡон кешеләрҙекенә ҡарағанда ла яҡшыраҡ белгән Эдуард Вәкилов яуап бирә.

- Бөгөн һатыуҙа этте ҡурҡыта торған махсус ҡоралдар бар. Әммә улар балалар өсөн тәғәйенләнмәгән. Мәҫәлән, боросло газ. Уның менән өлкәндәргә лә һаҡ булырға кәрәк. Уны эткә йүнәлтеп һибеү өсөн оҫталыҡ та, тиҙлек тә кәрәк. Бер баллон бөтә өйөргә етмәҫкә лә мөмкин. Шуға күрә көсөгөҙҙән килгәнсе ҡысҡырығыҙ, һеҙҙең тауыш өйөрҙө ҡурҡытып ҡына ҡалмаҫ, кешеләрҙең иғтибарын да йәлеп итер.

Эт менән бәйле хәүефһеҙлек талаптарын, атап әйткәндә, таныш булмаған хайуан янына барырға, ҡулдан ашатырға, һыйпарға, тибергә, һуғырға ярамағанлығын балаларығыҙға ла өйрәтегеҙ. Йыш ҡына тешләнеү осрағында кескәйҙәр үҙҙәре лә гәйепле булыуы ихтимал.

Әгәр ҙә осрашырға тура килһә, иң беренсе ҡағиҙә - ҡурҡҡанығыҙҙы белдермәгеҙ! Һеҙҙең реакцияны белер өсөн улар төрлө яҡтан өрөп, абалап, уратып алыр. Әммә ҡысҡырып, таш бәреп, ағас менән һелтәнеп, ҡаршы тороуығыҙҙы күрһәтегеҙ. Ҡорбанының ҡурҡмауын белһә, улар тиҙҙән һыуыныр. Тешләргә маташҡанда, хатта бер-икенсе эләктереп алғандарында ла үҙегеҙҙе яҡлауҙан туҡтамағыҙ. Быны улар бик яҡшы тойор, шуға күрә артабан һөжүм итмәйәсәк. Әгәр кешенең ҡурҡҡанын белһә, өйөр башлығы йәки уҫалыраҡтары муйынға йәбешер өсөн кешенең ҡулынан, аяғынан тешләп, йығылыуын көтә. Берәҙәк эт яңғыҙы йөрөгәндә ҡурҡыныс түгел. Ә быина өсөү-дүртәү булһа, хәүефләнергә урын бар. Бигерәк тә ҡышын. Үҙҙәренә ашарға табырға мәжбүр булып, өйөргә берләшеп йөрөгән эттәрҙән һаҡланырға кәрәк, - ти Эдуард Зәки улы.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

МИНЕҢ РӘМИ

# УЛ БАШҠАЛАРҒА ОҠШАМАҒАН...



**Кинорежиссер, Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Булат ЙОСОПОВ менән әңгәмәнән өҙөк. Әңгәмәнең тулы вариантын гәзитебеҙҙең алдағы һандарында уҡырһығыҙ.**



**Режиссер булараҡ, Рәми Ғариповтың дуҫы атайыңдың образын нисек күҙаллайһың?**

- Көтөлмәгән һорау бирҙең, Әхмәр ағай. Ҡыҙыҡлы бер сағыштырыу. Мин Рәми Ғариповтың көндәлектәрен уҡыған-дан һуң тыуған фекерҙәремде шағирҙың улы Азаматҡа һөйләнөм, ул ғәжәпләнеп тыңлай. Сөнки ул атаһын бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарап фекер йөрөтә бит инде. Тап шуның һымаҡ, мин дә атайыма икенсе күҙлектән сығып ҡарай алмайымдыр. Бәлки, шуның өсөн дә атайымдың образы минең өсөн формалашып та бөтмәгәндер. Вафатына 6 йыл үтте, бәлки уның һыны образ булып өлгөрһөн өсөн ваҡыт арауығы ла кәрәктер. Һәр шәхескә баһаны ваҡыт ҡуя, тиҙәр. Рәми Ғариповтың, мәҫәлән, үҙ юлы, үҙ образы. Атайым Тимер Йосопов минең өсөн Рәми Ғариповтың дауамы, һығымтаһы булып тойола. Был хаҡта Азаматҡа ла: "Атайың минең атайымдың тәрбиәләгән, ә мине атайым тәрбиәләне, шулай булғас, атайың мине лә тәрбиәләй", - тип әйткәнем бар.

Шул уҡ ваҡытта Рәми Ғариповтың формалашыуында уның уҡыусылары ла ҡатнашҡан. Был күренеш башҡорт мәҙәниәтенең һоҡланғыс тарихы. Рәми Ғарипов башҡорт тарихы цивилизаторы! Ул донъя мәҙәниәтен системалы аңлаусы Әҙәбиәт институтында уҡыған беренсе башҡорт шағиры. Ул үҙен түгел, ә үҙе тирәһендә система төҙөүсе. Рәми Ғарипов башҡаларға оҡшамауы менән ҡыҙыҡлы. Ул үҙен шул тиклем итеп төҙөй һәм мотлаҡ рәүештә система менән бәрелешкә инә.

Мин унда шағирҙың образын күрҙем. Уны күреп аралашып йәшәүселәр Рәми ағайҙың ниндәй булыуы хаҡында һөйләргә ярата. Әгәр ҙә мин уны нисек бар, шулай төшөрһәм, ул сағында документаль фильм килеп сығыр ине. Ә мин уны барыһы ла күрерлек итеп төшөрәм.

**Рәми Ғарипов 45 йәшендә донъя ҡуйған, унан һуң тағы ла 45 йыл үтте. Уның хаҡында замандаштары, дуҫтары, шәкерттәре тарафынан бик күп яҙылды, һөйләнелде, ә һин уның хаҡындағы фильмың менән шағир тураһында ниндәй яңы фекер әйтәһең?**

- Әгәр ҙә фән, ғилем кешенең аҡылына тәьҫир итһә, сәнғәт ул тойғоға, эмоцияларға йогонто яһай. Рәми Ғариповта кешелеклек сифаттары бик көслө булған һәм бөгөн беҙ ундай кешеләргә ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Ундайҙар күп булһа, тормошобоҙҙағы күп кенә ҡиҫкен проблемаларҙан ҡотолор инек. Сөнки ул һәр ваҡыт кешеләргә үҙен бағышлап йәшәгән, үҙе хаҡында бөтөнләй ҡайғыртмаған. Ул бер туҡтауһыҙ ижад итә һәм бер туҡтауһыҙ беҙҙе нимәгәлер, улай ғына ла түгел, кеше булырға өйрәтә. Өфө ҡалаһында тәүге 20-се башҡорт мәктәбен асыуҙа ла ул алдынғы сафта була һәм киләсәгебеҙ өсөн тырыша. Мин дә шул мәктәптә уҡыным һәм Рәми Ғарипов бының менән хәҙерге мине барлыҡҡа килтереүсе.

Рәми Ғарипов һәр ваҡыт беҙҙең ғаиләлә 5-се персонаж булды. Атайым, әсәйем көн һайын уны ниндәйҙер сәбәп менән иҫенә төшөрҙө. Беҙгә Рауил Бикбаев, Ирек Киньәбулатов йыш килеп йөрөнә. Улар килгәндә лә һәр береһенең телендә Рәми Ғарипов исеме яңғыраны. Атайымды аңлар өсөн иң тәүҙә Рәми Ғариповты аңлау талап ителде миңә.

Фильм өҫтөндә эшләгәндә миңә шағирҙың формалашыу мәсьәләһе бик ҡыҙыҡ булды. Был тәңгәлдә миңә уның шиғырҙары түгел, ә көндәлектәре ныҡ ярҙам итте. Рәми Ғарипов үҙен формалашырыусы бер сәбәп итеп Бөйөк Ватан һуғышын килтерә. Ул шиғриәтте һайламай, ә шиғриәт уны һайлай. Мине шиғыр яҙыр алдынан шағирҙың кисерештәре ныҡыраҡ борсой. Бер яҙмаһында ул "мине быгауларға ярамай" тип әйтә. Ошо һүҙҙәре менән үҙен трагик персонаж итеп раҫлай. Совет осоронда бындай образдар күп булған, шул уҡ Вавиловтың, Королевты алырға була. Рәми Ғарипов шиғри образдары аша тотош быуындарҙы барлыҡҡа килтереүсе лә.

**Рәми Ғарипов Бабичтан ҡайһы яғы менән айырылып тора?**

- Шәйехзада Бабич үҙ заманында йәшәгән шағир булараҡ, үҙенең миссияһын үтәй, Башҡортостан автономияһы нигеҙҙәрен һалыуҙа ҡатнаша: иң кәрәкле мәлдә, иң кәрәкле урында халҡының киләсәге өсөн йәнен фиҙа ҡыла. Рәми Ғарипов иһә, әйткәнемсә, цивилизатор. Ул донъя мәҙәниәте өлгөләрен үҙ халҡының мәҙәниәте аша яҡтыртыуға, синтезлаштырыуға өлгәшеүсе. Хәҙерге быуындар ҙа тап уның һымаҡ донъя мәҙәниәте өлгөләрен синтезлау аша тормошон яҡшыртыуға ынтыла.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 12-17 йөшлек 2 427 үҫмер яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы "Спутник М" вакцинаһын эшләткән. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Ирина Кононова һүҙҙәренсә, балалар прививканы яҡшы үткәрә. Әйткәндәй, 11 февралгә республикала сирлеләрҙең дөйөм һаны 154 161-гә еткән. Тәүлек эсендә сир йоҡтороуҙың 2 999 осрағы асыҡланған, 293 пациент - стационарҙа, ҡалған 17 меңгә яҡыны өйҙә дауалана. Бер тәүлектә коронавирус ҡорбандары 18-гә арткан.

✓Башҡортостанға идара итеү үҙәгендә йәмәғәт урындарында QR-код индерергә һәм сауҙа үҙәктәрен ябырға саҡырған мөрәжәғәттәр теркәлде. Роспотребнадзор ҡарары йәки республиканың баш санитар табибы тәҡдиме менән генә йәмәғәт транспортында QR-кодтар индерергә һәм сауҙа үҙәктәренең эшен туҡтатырға мөмкин. Әлегә быңдай ҡарар юҡ, тип белдерҙеләр Башҡортостанға идара итеү үҙәгендә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус инфекцияһына ҡаршы көрәш буйынса оператив штабтың сираттағы ултырышын үткәрҙе. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин һүҙҙәренсә, поликлиникаларҙың эш режимын оҙайтыу уҙған дүшәмбелә килеп тыуған көсөргәнеште кәметергә мөмкинлек бирҙе. Мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин әйтеүенсә, республикала уҡыусыларҙың 1,9 проценты ғына ковид менән сирләй, шуға күрә барлыҡ мәктәптәрҙә дистанцка күсереү күҙ уңында тотолмай.

✓Рәсәй Федерацияһы властары COVID-19 сирлеләр менән бәйләнештә булғандар өсөн карантин буйынса сикләүҙәрҙе бөтөрөргә ниәтләй. Был хаҡта Рәсәй Президенты Владимир Путин "Эшлекле Рәсәй" ағзалары менән осрашыуҙа белдерҙе. Ул быны "омикрон" менән бәйле ауырыу ағышының үҙенсәлектәре менән аңлатты. Бынан тыш, Хөкүмәт коронавирус таралыуға бәйле яңы сикләүҙәр индерергә йыйынмай, яңы локдаун тураһында һүҙ бармай, тип өҫтәне В. Путин.

✓Рәсәйҙә амбулатор звено хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡына өҫтәмә рәүештә 600 миллион һум бүленә. "Һуңғы бер нисә аҙнала һаулыҡ һаҡлауҙың амбулатор звеноһына йөк артты, - тип белдерҙе Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин. - Шуға күрә беҙ башҡа медицина учреждениелары хеҙмәткәрҙәрен, шулай уҡ медицина вуздары һәм колледждары студенттарын эшкә йәлеп итәбеҙ. Уларҙың хеҙмәтенә түләү өсөн 600 миллион һум бүләбеҙ".

***✓ Рәйес тә, мин дә, барыбыҙ ҙа, Рәми Ғариповтың "Туған тел"енән бар булдыҡ. Беҙҙән һуң да тағы ла бер нисә быуын әҙиптәре шул шиғыр йоғонтоһонда формалашты. Артабан да шулай барасаҡ.***



МИНЕҢ РӘМИ

# "ТУҒАН ТЕЛ"ДӘН БАР БУЛДЫҠ



**1979 йылда булды ул хәл. Колхозда эшләп йөрөгән сағым ине. Рәми Ғарипов тигән шағирҙы тәүге тапҡыр уның "Йондоҙло уйҙар" тигән шиғыр китабы аша белдем. Баймаҡ ҡалаһындағы китап магазинынан һатып алғайным китабын.**



Бер көн Һаҡмарға һыу инергә төштөм дә, ҡомда ҡыҙынып, китаптағы йондоҙло уйҙарға сумып ятам. Ауылдашым, күршем Рәйес Түләк әрмендән ҡайтып, колхозда тракторсы булып эшләп йөрөй ине, ул да һыу инергә килеп, сисенергә тотондо. Ҡулымдағы китапты күреп ҡалды ла: "Ниндәй китап ул?", - тип һораны. "Рәми Ғариповтың "Йондоҙло уйҙар" китабы", - тинем. Күршем китапты уҡырға алып торҙо ла, шул уҡ кисте мине өйөбөҙҙән саҡырып сығарып, китапҡа баһаны тик беҙҙең ауылдағыса итеп биреп, һоҡланыуын йәшерә алмайынса: "Ух әй!" - тине. Беҙҙенсә был һүҙҙәр иң юғары баһаны ла аңлата булыр.

Шулай итеп, был көндән бала сағыбыҙ баррикадаларының ике яғында бер-беребеҙгә ҡаршы "һуғышып" йөрөп, ара-тирә ауылыбыҙ эдисондары Сәмиғулла Нәүширбанов менән Хәйҙәр Ғәйетбаевтың усаҡлыҡтарында араларыбыҙ йылына башлаған Рәйес менән мине Рәми Ғарипов ғүмерлеккә дуҫлаштырып, шиғриәт тигән бер һуҡмаҡтан йәнәш атлатты. Бәхетиһен, Рәйес тә минең кеүек үҙе өсөн генә йәшереп шиғырҙар яҙа икән. Шул уҡ төндә шағирҙың йондоҙло уйҙары баҙлауында зиһенебеҙ асылып, киләсәгебеҙҙе лә яҡтыртҡандай тойолдо. Ауылыбыҙҙан Өфө тигән оло донъяларға сығып китеүебеҙгә лә шул уҡ "Йондоҙло уйҙар" сәбәпсе булды.

Әммә баш ҡала беҙҙе Рәми Ғариповһыҙ ҡаршыланы. Уның ҡарауы, шағирҙың дуҫтары, шәкерттәре Раил Бикбаев, Динис Бүләков, Тимер Йосопов, Ирек Кинйәбулатов, Аҫылгужа Баһуманов беҙгә дуҫлыҡ ҡулдарын һуҙҙы. Уларҙың усында Рәми Ғариповтың ҡул йылылығы ла бар ине.

Йыш ҡына Рәйес менән шул хаҡта ла һөйләшеп алғаныбыҙ булды. Әгәр ҙә теге саҡта Һаҡмарҙа һыу ингәндә минең ҡулда Рәми Ғариповтың "Йондоҙло уйҙар"ы булмаһа, артабанғы яҙмышыбыҙ нисек килеп сығыр ине икән? Әйтеүе ҡыйын. Үҫмер саҡта кем генә шиғыр яҙмай ҙа, кем генә романтик хыялдарға бирелмәй, йондоҙло уйҙарға суммай икән!

Достоевский хаҡлы рәүештә: "Беҙ барыбыҙ ҙа Гоголдең "Шинел"енән сыҡтыҡ", - тигән. Был аңлашыла ла, "иң бәләкәй чиновник" Акакий Башмачкиндың, үҙебеҙсә әйткәндә, билен биштән быуып, аслы-туҡлы, яланғас тиерлек йөрөп, туплаған аҡсаһына тектергән шинелен урамда бандиттар һалдырып алыуы барса халыҡ туплаған байлыҡҡа айырым кешеләр эйә булған егерменсе быуатҡа ла ишаралай түгелме ни? Гоголь был әҫәрен 1841 йылда яҙған. Достоевский хаҡлы, Гоголдең үлемһеҙлеге лә тотош быуаттарҙы алдан күрә һәм һүрәтләй алыуында.

Ә беҙ иһә, Рәйес тә, мин дә, барыбыҙ ҙа, Рәми Ғариповтың "Туған тел"енән бар булдыҡ. Беҙҙән һуң да тағы ла бер нисә быуын әҙиптәре шул шиғыр йоғонтоһонда формалашты. Артабан да шулай барасаҡ. Һәр бер башҡорт өсөн йәшәү программаһы, Рух Конституцияһы булырлыҡ ул шиғыр. Барыһынан бигерәк мине шиғырҙың һуңғы ике юлы тетрәндерә:

Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ...

Эйе, беҙ атай-олатайҙарыбыҙ рухына тоғро булһаҡ ҡына, ейәнейәндәребеҙгә милләтебеҙ эстафетаһын тапшыра алһаҡ ҡына, башҡорт булһаҡ ҡына, кеше тип аталырға хаҡлыбыҙ! Иншаллаһ!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

# ДОНЪЯ БУЙЛАП ШАҒИР УҘҒАН



**Ерҙә шағир йәшәгән. Күңеле ҡушҡанса һөйгән, һөйөлгән, хаталанған... Үҙенә лә, яҡындарына ла гел генә һил, тыныс, рәхәт булмағандыр. Нисек тә - уның яҙмышы. Шиғырҙарында ҡалған яҙмышы. Шиғриәте алдында баш эйгәндә яҡты һәм ҡараңғы көндәрен берҙәй тигеҙ бүлешкән ҡатынына, балаларына, туғандарына, дуҫтарына рәхмәтебеҙҙе, ихтирамыбыҙҙы ла белдерәйек.**

Ерҙә талант йәшәгән. Үҙенсә, һуңғы һулышынаса тик үҙенсә. Ошо үҙе бөйөклөк түгелме икән ул? Уның саф ижады дан да, аҡса ла көҫәмәгән. Йөрәгендәге хисен һүҙгә генә әйләндергән бары.

Ҡасандыр Винсент Ван Гог тигән рәссам булған. Картиналарын бер кем дә һатып алмаған. Ҡустыһы аҡтан үлмәҫлек кенә аҡса биреп торған. Был өлөштә ул мольберт һәм буяуҙарға ла тотонған. Ҡустыһы бер байҙы уның картинаһын алырға күндергән. Килгән кешенең һүрәткә күтәрелеп тә ҡарамауынан Ван Гог барыһын да аңлаған һәм саҡырылмаған ҡунаҡты ҡыуып сығарған. Рәссам был донъянан үҙ теләге, үҙ ихтыяры менән киткән. Бары сабый ғына ошо дәрәжәлә үҙе булып ҡалалыр...

Беҙҙең Рәми Ғарипов та шулайыраҡ йәшәгән. Талантларҙың ҡәҙерен йыш ҡына үтә һуңлап беләләр һәм быны аңлауҙың үкенесе күберәк.

Рәми Ғарипов халҡын яратҡан, телен һөйгән. Халҡы һәм теле уның үҙен дә күтәрҙе, күтәрә, күтәрәсәк. Башҡортостандың халыҡ шағирына бөгөн 90 йәш тулған булыр ине.

**Йомабикә ИЛЬЯСОВА,**
**шағирә.**

БЫНАҒАЙЫШ!



# ИКМӘКМЕ, КӘНФИТМЕ?

**Харап икән, кәрәге юк! Тәмлекәстәрҙе әйтәм. Сеймал һатып алыу хаҡтары артыу сәбәпле, "Хлебопром", "Кондитер берекмәһе", "Славянка", "Ferrero", "Mondelez" һәм башҡа шундай тәм-том етештереүсе компаниялар 1 февралдән үҙ продукцияларына 23 процентҡа тиклем хаҡ артыуы хаҡында белдерҙе. Әйткәндәй, уларҙың тәм-томо ошоға тиклем дә әллә ни арзандан түгел ине. Әлегә һүҙ популяр бренд исәпләнгән, әммә ниңәлер көн-төн телевидениенан рекламаланған Ferrero, Rafaello, Kinder, Milka, Alpen Gold кәнфит һәм шоколадтары, Nutella пасталары хаҡында һүҙ барһа ла, артабан 130-ға яҡын төр тәм-томға хаҡ артасаҡ.**

Дөрөҫөн әйткәндә, сит ил маркалы был кәнфиттәр әле лә кеше күҙенә төртөлөп тигәндәй һатыусы кассаһы янында кәштә емерерәп ята, тик бына уларҙы алыусыһы ғына кәмегәндән-кәмей. Беренсенән, күптәр кеҫә ягын уйлаһа, был сағыу, ылыҡтырғыс ҡағыҙға төрөлгәндең эсендә нимә йәшерелгәнен ата-әсәләр ҙә яҡшы аңлай башланы, ахыры. Аҙыҡ-түлек магазиндарында йыш күҙәтелеүенсә, бала-саға нисек кенә илап-туҙынып һораһа ла, әлеге кәнфиттәр урынына балаһына мандарин, банан, алма, бик булмаһа, емеш-еләктән эшләгән пюре ҡабы тоттороусы әсәйҙәр күберәк осрай. Бик дөрөҫ эшләйҙәр.

Арттырмағайҙары, аңлаған кешегә ул алдатҡыстарҙың бушлай ҙа кәрәге юк. Бөтөнләй кәштәләрҙән юғалһа ла үкенерлеге юк. Тәм-томдарға ниҙәр ҡушып етештереләүе хаҡында хәҙер уҡыусы бала ла яҡшы белә, тик бына уларҙың күпселеге барыбер үҙҙәрен тыя алмай, бисаралар. Мәктәптән ҡайтышлай, юл ыңғайы "Магнит"ҡа һуғылып, шул тәмләкәстең беренһен ас ҡарынға ашап ҡырҡыша улар. Ни өсөн? Уҡыуҙан асығып ҡайтып килгән баланың бынан тамағы туймай, әлбиттә, сөнки уның бер туҡлыҡлығы ла юк: шәкәр һәм углевод ише алдатҡыс һәм арбағыс ҡына ул. Бая әйтелгәнсә, кәнфит, оҙаҡ һаҡланыусы торт, пирожный, кекс, хатта печенье-пряник составына ла трансмайҙар, шул иҫәптән күптән яманаты сыҡҡан пальма майы, буяу, яһалма тәмләткестәр, консервант, күп һанлы Е өҫтәмәләре һәм бик күп шәкәр ҡушыла. Быңдай ризыҡ, әгәр уны шулай тип әйтергә яраһа, тотош углевод һәм шәкәрҙән тора һәм ул организмда зарарлы майға әйләнеп, холестеринды арттыра; һөҙөмтәлә был һимерәүгә, йөрәк-ҡан тамырҙары, шәкәр сиҙәренә, кариес, диатез, аллергияға килтерә.

Был хаҡта яҙып тороу ҙа артыҡтыр, уны һәр кем яҡшы белә. Икенсе яҡтан, тәм-томға хаҡ артыуы, бәлки, ябай халыҡ өсөн файҙаға ғына булыр: кәнфит алырғамы, әллә икмәк менән май-һөтмө? Икмәк-һөт ризыҡтары ла бит хәҙер арзандан түгел. Тимәк, ябай һатып алыусы әлеге альтернативаның икенсе өлөшөнә өҫтөнлөк бирәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Федерацияһында омикрон-штамдың ВА.2 төрөн йоҡтороу осраҡтары асыкланған, тип хәбәр итте Роспотребнадзор етәксеһе Анна Попова коронавирусҡа ҡаршы көрәш буйынса координация советында. "Рәсәйҙә ВА.3 линияһы асыҡланмаған, ВА.2 линияһына ҡараған күпселек осраҡтар Мәскәүҙә, Марий Эл Республикаһында, Ростов өлкәһендә һәм Башҡортостан Республикаһында теркәлгән", - тине ул. Анна Попова әйтеүенсә, бер нисә илдәге мәғлүмәттәр был төрҙең тағы ла нығыраҡ йоғошло булыуы хаҡында һөйләй.

✓Профессор, медицина фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Вил Тимербулатов Башҡортостан Башлығының һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе итеп тәғәйенләнде. Башҡортостан Республикаһы Башлығының 29 ғинуарҙағы бойороғона ярашлы, Вил Тимербулатов йәмәғәт башланғысында эшләй.

✓1 февралдән рәсәйҙәргә социаль түләүҙәр, пособиелар һәм компенсациялар 8,4 процентҡа арта. Индексация балалы ғаиләләргә тейешле ҡайһы бер пособиеларға ла ҡағыла. Шулар иҫәбендә - бала тыуғас бер тапҡыр бирелә торған пособие, бала тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособие, баланы ғаиләгә тәрбиәгә алғанда бер тапҡыр бирелә торған пособие. Беренсе балаға Әсәлек капиталы күләме лә арта - 483,9 мең һумдан 524,5 мең һумға, ә икенсе һәм унан һуңғы балаларға иһә 693,1 мең һумға тиклем

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин март башында Федераль Йыйылышҡа йыллыҡ Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһай. Мөрәжәғәтнамәнең аныҡ датаһы әлегә билдәһеҙ, 1 йәки 3 март булыуы ихтимал. Һуңғы тапҡыр дәүләт башлығы Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамә менән 2021 йылдың апрелендә сығыш яһағайны. Ул ваҡытта Президент иҡтибарын социаль-иҡтисади проблемаларға йүнәлтте, шулай уҡ Рәсәйгә ҡаршы төрлө провокацияларға ҡаты һәм асимметрик яуап бирергә вәғәҙә бирҙе.

✓Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура министрлығы 2022 йылдың беренсе кварталына торлаҡтың бер квадрат метрының уртаса баҙар хаҡын расланы - 72 565 һум. Торлаҡтың бер "квадраты"ның уртаса баҙар хаҡы республикала даими йәшәгән һәм торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж граждандарға бүленгән субсидияларҙы иҫәпләү өсөн кәрәк. Был субсидиялар уларға торлаҡ һалыуҙа (һатып алыуҙа) ҡатнашыу өсөн федераль һәм республика бюджеттары аҡсаһы иҫәбенә бүленә.

✓ Әбйәлил, Ауырғазы, Йәрмәкәй, Ейәнсура, Ҡыйғы, Тәтешле һәм Шаран райондары хакимиәттәре юғары комплекслы баһаға лайыҡ булды. Иглин, Мишкә, Нуриман, Өфө, Белорет, Бөрө, Учалы районҙарында хәлдәр насарыраҡ.



ҠЫҪҠАСА

# ПЕНСИЯҒА ӨҪТӘЛӘ

✓ **Башҡортостанда пенсионерҙар 8,6 процентҡа тиклем арттырылған пенсия ала башланы, тип хәбәр иттеләр Рәсәй Пенсия фондының республика буйынса бүлексәһенән.** Республиканың эшләмәгән пенсионерҙарына индексацияланған түләүҙәр бөгөндән башлап ғәҙәти график буйынса таратыла. 1 ғинуарҙан пенсия 5,9 процентҡа артты. 1 февралдән ул тағы ла 8,6 процентҡа тиклем индексацияланды. Февраль пенсияһы менән бергә пенсионерҙар ғинуар өсөн өҫтәмә аҡса алырға тейеш (пенсияны 5,9 проценттан 8,6 процентҡа тиклем индексациялауҙы иҫәпкә алып). Түләүҙәр автоматик рәүештә килә, бының өсөн Пенсия фондына мөрәжәғәт итергә кәрәкмәй. "Страховка пенсияһын һәм страховка пенсияһына билдәләнгән түләү күләмен индексациялау 1,050 миллиондан ашыу пенсионерға ҡағылды. Башҡортостанда ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһының уртаса күләме индексацианан һуң 17,5 мең һум тәшкил итте", - тип белдерҙе Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров.

✓ **Республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова 2022 йылдың ғинуарынан үҙ көсөнә ингән яңылыҡтар - социаль ярҙам сараларын күрһәтеү йөһәтенән үҙгәрештәр, минималь эш хаҡы күләме һәм йәшәү минимумы тураһында һөйләне.** "1 ғинуарҙан федераль законға ярашлы минималь эш хаҡы күләме 8,6 процентҡа артып, 13 890 һум тәшкил итте. Быны Урал коэффициентына ҡабатлаһаҡ, билдәле бер сумма килеп сыға. Әммә беҙҙең республикала эш биреүселәр һәм профсоюздар менән федераль МРОТ менән сағыштырғанда ҙурыраҡ дәүмәл - 14 200 һум тураһында һөйләшеп килештек. Шуныһы мөһим: 1 ғинуарҙан республикала, минималь эш хаҡы тураһында килешеүгә ярашлы, уның күләме - 16 330 һум тәшкил итә", - тине министр.

✓ **Рәсәйҙәрҙе картанан аҡса алыуҙың яңы мутлашыу схемаһы хаҡында иҫкәрттеләр.** Рәсәйҙә фишинг сайттарының һаны артҡан, унда клиент концерт-спектаклдәргә билет һатып алыу урынына мутлашыу сайтына эләгә. Енәйәтселәр социаль селтәрҙәр, мессенджерҙар һәм электрон почта аша билеттар һатыу хаҡында ялған игландар тарата. Клиент һылтанма буйынса күскәс, уға шәхси һәм бәйләнеш өсөн мәғлүмәттәрҙе, шулай уҡ банк картаһының реквизиттарын күрһәтеп, түләү формаһын тултырырға тәҡдим ителә. Билет урынына кеше мутлашыусыларҙың аккаунттары сайтына эләгә. Улар, үҙ сиратында, картанан аҡса алыу менән шөғөлләнә. Граждандарға ышаныслы сайттар менән файҙаланырға, һылтанмаларҙы вирусҡа ҡаршы программалар ярҙамында тикшерергә кәңәш ителә. Әгәр билет һатып алған сайт шикле булып күренһә, картаны тиҙ арала блокировкаларға йәки банкка шылтыратырға кәрәк.

✓ **Рәсәйҙә педофилдарҙы ғүмерлеккә төрмәгә ултыртыу тураһында закон көсөнә инде. Был хаҡта Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володин хәбәр итте.** "Ләкин әлеге проблема буйынса ҡануниәттә байтаҡ етешһеҙлектәр ҡалды, шуға күрә эште дауам итергә кәрәк. Мәҫәлән, ошо көндәрҙә 13 йәшлек ҡыҙҙы бер нисә тапҡыр көсләгән педофил ни бары 3,5 йылға дөйөм режимлы колонияға оҙатылды. Был ғәҙелме? Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 134-се статьяһының 3-сө өлөшө ун йылға тиклем иректән мәхрүм итеүҙе күҙ уңында тота. Был педофилдарға йомшаҡ яза бирелгән беренсе осраҡ түгел. Шуға бәйле Генераль прокуратураға Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының статьялары буйынса балаларға ҡаршы енәйәттәр өсөн ғәйепләү ҡарарҙары сығарыуҙың хоҡуҡ ҡулланыу практикаһына анализ яһау үтенесе менән мөрәжәғәт иттем", - тине Вячеслав Володин. Уның фекеренсә, педофилдарҙы мөмкин тиклем ҡаты язаға тарттырырға кәрәк. Хатта енәйәт тәүге тапҡыр ҡылынһа ла. Был позиция федераль закондарҙа сағылыш табырға тейеш.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КҮПСЕЛЕК ҠӘНӘҒӘТ

**Башҡортостан Хөкүмәте сайтында Башҡортостанда йәшәүселәрҙән интернет-һорау алыу һөҙөмтәләре баҫылған, унда улар ҡала һәм район хакимиәттәре эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелегенә баһа биргән.**

Дөйөм алғанда, һорау алыуҙа ҡатнашҡан республика халҡының 80,4 проценты муниципаль власть органдарының эше менән ҡәнәғәт. Электр һәм газ менән тәьмин итеүҙе ойоштороу кимәле иң юғары баһа алған (һорауға яуап биреүселәрҙең 94,3 һәм 92,5 проценты). Күпселек автомобиль юлдарының сифаты менән ҡәнәғәт түгел (65,9 процент). Әбйәлил, Ауырғазы, Йәрмәкәй, Ейәнсура, Ҡыйғы, Тәтешле һәм Шаран райондары хакимиәттәре юғары комплексы баһаға лайыҡ булды. Һорау алыуҙа ҡатнашыусылар фекеренсә, Иглин, Мишкә, Нуриман, Өфө, Белорет, Бөрө, Учалы районҙарында хәлдәр насарыраҡ. Түбән баһаларға тәү сиратта был муниципалитеттарҙағы юлдарҙы торошо йоғонто яһаны. Ҡала округтары араһында Күмертау һәм Сибай алдынғы урындарҙы биләй, унда халыҡтың 94 проценттан ашыуы хакимиәт эшенә ыңғай баһа биргән. Иң аҙаҡҡы урындарҙа Салауат һәм Өфө ҡалалары. Баш ҡала йәшәүселәрҙе автомобиль юлдарының сифаты һәм транспорт хеҙмәтләндереүен ойоштороу ҡәнәғәтләндермәй. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров фекеренсә, халыҡты борсоған төп проблемаларҙың береһе - юлдар, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, ихаталарҙы һәм подъездарҙы тәҙәкләндереү. Муниципалитет башлыҡтары тап ошо мәсьәләләргә иғтибар итергә тейеш.

# СТАРОСТАЛАРҒА - ВӘКӘЛӘТТӘР

**Февралдә БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары сираттағы пленар ултырышта "БР-ҙа ауыл биләмәләре старосталары тураһында" БР Законының 5-се һәм 6-сы статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡарарға планлаштыра.**

"Закон проекты ауыл старосталарына ҡайһы бер вәкәләттәрҙе бирергә тәҡдим итә. Старосталар урындағы үҙидаралыҡ органдарына ҡайһы бер йүнәлештәр буйынса ярҙам итә һәм урындағы әһәмиәткә эйә мәсьәләләрҙе хәл итеү тәҡдимдәрен индерә аласаҡ. Биләмәнең, ҡала округының халыҡтың ихтыяжына ҡағылған мәсьәләләр буйынса ултырыштарында старосталар кәңәш биреү хоҡуғы менән ҡатнаша ала", - ти БР парламенты спикеры Константин Толкачев.

Башҡортостанда старосталар институты 2019 йылда булдырылды.

Әйткәндәй, 2022 йылдың ғинуарында РФ Дәүләт Думаһы "Власть асыҡлығының берҙәм системаһында урындағы үҙидаралыҡты ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында" закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. Ул урындағы үҙидаралыҡтың ике кимәлле системаһынан баш тартыуҙы, ауыл советы башлыҡтары вәкәләтен район һәм ҡала хакимиәттәре башлыҡтарына тапшырып, урындағы власть органдарын бөтөрөүҙе күҙаллай. Күсеү осоро 2028 йылға - халыҡ һайланыусыларының урындарҙа вәкәләттәре бөткәс тамамланасаҡ. Урындағы үҙидаралыҡты оптималләштереү тураһындағы закон проекты асыҡ власть реформаһын дауам итә. Документ Свердловск өлкәһенән Дәүләт Думаһына депутат Павел Крашенинников һәм Красноярск крайы сенаторы Андрей Клишас тарафынан әҙерләнгән.

# БАШҠОРТ АТЫ МУЗЕЙЫ

**Башҡорт аты музейы Баймаҡта, ҡалалағы XIX быуаттың берҙән-бер архитектура ҡомарҡҡыһы булған сауҙагәр Кабанов йортонда асыла. Башҡортостандың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин хәбәр итеүенсә, Башҡорт аты музейы "Ирәндек" тарихи-археологик һәм ландшафт музей-ҡурсаулыҡ экспозицияһының бер өлөшө буласаҡ.**

"Баймаҡ ҡалаһындағы "А. Ф. Кабанов йорто" архитектура ҡомартҡыһында тарихҡа тиклемге осорға арналған музей экспозицияһы, шулай уҡ музей-ҡурсаулыҡтың административ өлөшө урынлашҡан. Музейҙың экспозицияһын яңыртырға һәм киңәйтергә ниәтебеҙ бар. Бында Башҡорт аты музейын булдырабыҙ. Әҙерлек эшен хәҙерҙән үк башлайбыҙ", - тине Данир Ғәйнуллин ошо һәм башҡа проекттарҙы тикшереү буйынса Баймаҡ районы башлығы Фәнис Әминев ҡатнашлығында үткән йыйылышта.

"Ғилми хеҙмәткәрҙәр әҙерләгән концепцияны йыл дауамында тормошҡа ашырырға уйлайбыҙ. "Ирәндек" тарихи-археологик һәм ландшафт музей-ҡурсаулығында кадрҙар ҙа үҙгәрҙе. Хәҙер Баймаҡ районында Рәмил Насретдинов етәкселегендә өмөтлө йәш белгесебеҙ Венер Нәбиев эшкә тотона. Ул Кабановтар йортонда экспозиция залдарын булдыры, "Ирәндек" музей-ҡурсаулығы биләмәһен күҙәтеү һәм экскурсиялар ойоштороу өсөн яуаплы", - тип билдәләне Данир Ғәйнуллин.

# КИРЕ ҠАЙТАРЫЛА

**Быйыл федераль бюджет эске туризмды үҫтереүгә 5 миллиард һум аҡса бүлә. "Туристик кешбэк"тың шарттары элеккесә ҡала: турисҡа тур йәки йәшәү хаҡынан - 20 процент, күп тигәндә 20 мең һум кире ҡайтарыла. Юл хаҡын "Мир" картаһы менән түләргә кәрәк, өҫтәүенә бер картанан бер нисә тур һатып алырға була.**

"18 ғинуарҙан бишенсе һатыу этабы башланды, ул 12 апрелгә тиклем дауам итә. 30 апрелгә тиклем телә-һә ниндәй төбәккә сәйәхәт һайларға, навигация башланғандан алып һәм 1 июнгә тиклем круизға сығырға мөмкин", - тине Башҡортостандың Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Ринат Фәтҡуллин. Дәүләт комитеты мәғлүмәттәре буйынса, 2021 йылда Башҡортостан Рәсәйҙең "курорт булмаған" төбәктәре араһында шифаханаларға һатылған юлламалар һаны буйынса беренсе урынды алды. Программала 24 ҡунаҡхана һәм 6 туроператор ҡатнашты. Башҡортостанға 120 тур бар ине, уларҙы илдең 63 туроператоры һатты. 2021 йылдың башынан Рәсәйҙә 1,7 миллион самаһы кеше ошо программанан файҙаланған. Улар 34 миллиард һумдан ашыуға турҙар һатып алған. Уларҙың картаһына 6,7 миллиард һум аҡса кире ҡайтарылған. Программаның рәсми сайты - мирпутешествий.рф. Ҡыҙыу бәйләнеш телефондары: 8 800 444-31-27 (туристар һәм операторҙар өсөн), аҡса кире ҡайтарылмаһа - 8 800 100-54-64.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә Өфө менән Ҡаҙан араһында экспресс-поезд ебәреү пландары менән уртаҡлашты. 31 ғинуарҙа тимер юл транспортын үҫтереүгә арналған кәңәшмәлә Куйбышев тимер юлы начальнигы Вячеслав Дмитриев ошо проекттың эшләй башлауы тураһында хәбәр иткәйне. "Юлға 15 сәғәт самаһы ваҡыт китә. Артабанғы маҡсат - юлдағы ваҡытты 12 сәғәткә ҡалдырыу. Быға тиклем ике республика араһындағы тимер юл бәйләнеше 21 сәғәт дауам иткән, халыҡ йөрөмәгәс, ябылған. Был поезды "тәгәрмәсле ҡунаҡхана" тип әйтергә мөмкин. Поезд Өфөнән кис көнө ҡуҙғала, иртәнсәк Ҡаҙанда була", - тип билдәләне Куйбышев тимер юлы начальнигы.

✓Башҡортостанда быйыл яҙ яңы тыуған сабыйҙар өсөн бүләк йыйылмаһы үҙгәрә. Был хаҡта "Башинформ" агентлығына республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр иттеләр. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2001 йылдан республика властары урындағы бала табыу йорттарында донъяға килгән бөтә сабыйҙарға бүләк әҙерләй. Йыйылманың составы һәм үҙкиммәте ваҡыты-ваҡыты менән үҙгәреп тора. Быйыл 1 марттан бүләккә һигеҙ әйбер тапшырыла.

✓Рәсәй Хөкүмәте Рәсәйҙең йыйылма командаһы еңеүселәре өсөн аҡсалата бүләктәр тураһында мәғлүмәт баҫтырып сығарҙы. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте премьер-министры Михаил Мишустин һүҙҙәренсә, Пекинда Олимпиада һәм Паралимпиада атлетында алтын миҙал өсөн 4 миллион һум бирелә, көмөш миҙалға - 2,5 миллион һум, бронзаға - 1,7 миллион һум. Башҡортостандан Олимпия һәм Паралимпия уйындары еңеүселәре, призерҙары 2 миллион, 1,5 миллион һәм 1 миллион һум менән бүләкләнә.

✓Әгәр коронавирус менән ауырыған балаларҙың һаны 20 проценттан артһа, Өфө мәктәптәре дистанцион уҡытыуға күсергә мөмкин. Был турала баш ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хафизова хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, Өфөнөң балалар баҡсалары әлегә штат режимында эшләй, әгәр төркөмдә бала йәки уҡытыусы ауырып китһә, ул тулыһынса ете көнлөк карантинға ебәрелә.

**БАШИНФОРМ"**
**материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ТАШҠЫНҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ...

**Яҙ һулышы тойола, аяҡ аҫтында ҡар йомшарып, бутҡаға әйләнә бара. Был бигерәк тә йорт ихаталарында ныҡ һиҙелә. Хәйер, быны ябай халыҡ ҡына түгел, хатта етәкселәр ҙә һиҙә икән. Ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә төрлө тармаҡтарҙағы көнүҙәк мәсьәләләр менән бер рәттән, күп фатирлы йорттар ихаталарында идарасы компаниялар тарафынан ҡар таҙартыу мәсьәләһе лә ҡаралды.**

Баш ҡалала барлығы 220 шәхси идарасы компания һәм торлаҡ милекселәре берлеге (товарищество) бар һәм улар мең самаһы күп фатирлы йорттоң 800 ихатаһын хеҙмәтләндерә. Улар тарафынан территорияларҙы таҙартырға 45 берәмек техника һәм 318 урам таҙартыусы сыға. Өфө ҡалаһы райондарының торлаҡ хужалығы идаралығынан айырмалы, шәхси ойошмалар хеҙмәткәрҙәргә ҡытлыҡ кисермәй, сөнки уларҙың эш хаҡы тариф сетҡаһына ярашлы түгел, ә килешеү буйынса билдәләнә. Әммә механизацияланған таҙартыу йәһәтенән ауырлыҡтар килеп тыуа - идарасы ойошмаларға 2-3 йорт ҡына ҡараған, техника һатып алыу маҡсатҡа ярашлы түгел, шуға күрә техника ситтән йәлеп ителә. Ләкин ҡар күп яуғанда техника бушамай, уларҙы ҡуртымға алыу менән ҡатмарлыҡтар тыуа һәм халыҡтан ялыуҙар яуа башлай. Шулай ҙа, былтырғы менән сағыштырғанда быйыл ҡар таҙартыуға бәйле шәхси компаниялар ҙың эше буйынса ялыуҙар күпкә кәмегән.

Ә дөйөм ҡала буйынса ҡарағанда, тәүлек буйына ҡала урамдарында көндөҙгө сменала 260 берәмек техника һәм 550 юл эшсеһе, төнөн 180 берәмек техника һәм 150 эшсе эшләй. Ғинуарҙың тәүге ун көнлөгөндә ауыл-төшөм күп булғанлыҡтан, өҫтәмә рәүештә 70 берәмек техника йәлеп ителгән. Өфө урамдарын һәм юлдарын таҙартыусыларҙың эш хаҡы артыуына бәйле өҫтәмә рәүештә 106 кеше, шул иҫәптән 60 водитель һәм механизатор, 46 эшсе эшкә ҡабул ителгән. Февралдең тәүге аҙнаһында полигондарға һәм ҡар иретеү пункттарына 114 мең кубометр ҡар сығарылған, миҙгел башынан барлығы сығарылған күләм 1 162 410 кубометр тәшкил иткән. Көн һайын юлдар һәм тротуарҙар боҙлауыҡҡа ҡаршы эшкәртелә, был маҡсатта миҙгел башынан 14197 тонна ҡом-тоҙ ҡатнашмаһы, шулай уҡ 4010 тонна бионорд ҡулланылған.

Оператив кәңәшмәлә яҙ тураһында, дөрөҫөрәге яҙғы ташҡын тураһында ла һөйләшеү булды. Ғәҙәттә, баш ҡалала ташҡын апрель һуңы - май башына тура килә. Анализлауҙар күрһәтеүенсә, ҡар ҡатламы нормanan артмаған. Мәғлүм булыуынса, йылғала һыу 700-800 сантиметрға күтәрелһә, Дим, Киров, Ленин райондары биҫтәләрен баҫа, 850-990 сантиметр булғанда, Калинин районы территорияһына ла һыу сыға. Былтыр иң юғары кимәл Ҡариҙел йылғаһында күҙәтелгән һәм 684 сантиметрға еткән. Тәбиғәттең холҡон белеп булмай, шуға һәр нәмәгә әҙер торорға кәрәк. Ҡала хеҙмәттәре быны аңлап эш итә.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МИҘГЕЛЛЕ СИРГӘ ӘЙЛӘНЕРМЕ?

**Омикрондан һуң ниндәй штамм киләсәк һәм ул ниндәй буласаҡ? Был хаҡта табип-биофизик Нелли СОСЕДОВА түбәндәгеләрҙе һөйләй:**

"Омикрон тураһында беренсе тапҡыр 2021 йылдың ноябрендә яҙып сыҡҡайнылар һәм 2022 йылдың ғинуарына ул инде бөтөн донъяға, шул иҫәптән Рәсәйгә таралып та өлгөрҙө. Был вирус 2020 йыл аҙағында башланып, 2021 йылда тулы хакимлыҡ итеүсе дельта-штамды алыштырҙы. Фаразлауҙарынса, тажзәхмәттең төрҙәргә бүленеү тиҙлегенән сығып, тиҙҙән уның тағы бер варианты килеп сығыу ихтималлығы бар. Яңы штамдан да омикронға хас таралыу тиҙлеген көтөргә мөмкин, тик был сир тағы ла еңелерәк кисереләсәк, тип ҡуҙаллырға нигеҙ бар. "Беҙ киләһе мутация тәбиғәте буйынса еңел булыр тип көтәбеҙ, йәғни яңы штамдың әҙемтәләре еңелерәк буласаҡ. Ул кешенән кешегә бик тиҙ йоҡҡан хәлдә лә организмда тупланыу һәм өлгөрөү осоро омикрондыҡына оҡшаясаҡ",- ти Нелли Соседова.

Эксперт фекеренсә, вирусҡа уны йоҡтороусыларҙың сирләүе кәрәк, ә үлеме түгел. "Вирус шундай паразит, уға үҙенең "хужаһы" менән берләшергә, ойошорға кәрәк, һәм кеше ауырыһын да был сирҙе артабан таратһын. Шул саҡ вирус грипп, ОРВИ һәм аденовирус кеүек үк миҙгелле сиргә әйләнәсәк, - тип аңлатма бирә табип. - Ә яңы мутацияны киләһе йыл баштарында көтөргә ҡала. Кешелек тажзәхмәт менән ике йыл йәшәй инде һәм ошо ваҡыт эсендә вирус тиҫтәләгән төргә бүленде. Тажзәхмәттең бөгөн барлыҡҡа килгән бөтөн төрҙәренә ҡаршы тик бер генә тәьҫирле сара - вакцина бар. Прививка тажзәхмәттән йөҙ процент һаҡлай алмаһа ла, сир йоҡтороу хәүефен кәметә һәм сирҙе еңеллештерә..."

# ТЕАТРҒА БУШЛАЙМЫ?

**Йыл башынан "Пушкин картаһы"ның номиналы йылына 3 мећдән 5 мең һумға тиклем арттырылды.**

Уның ярҙамында 14-22 йәшлек егет-ҡыҙҙар дәүләт иҫәбенә мәҙәни сараларға билет һатып алырға мөмкин. Бынан тыш, 1 февралдән ошондай сараларҙың исемлеге киңәйҙе. Был туралағы ҡарарға Хөкүмәт Рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы. "Пушкин картаһы"н театрҙа, музейҙа һәм концерт залдарынан тыш, кинотеатрҙар ҙа ҡабул итә башлай. Картаны Мәҙәниәт министрлығы һәм Кино фонды булышлығында төшөрөлгән Рәсәй фильмдарына билет һатып алғанда ҡулланырға була. Йыл буйына кинотеатрҙарға барыу өсөн ике мең һумға яҡын аҡса тотонорға мөмкин. "Пушкин картаһы" - йәштәр өсөн махсус банк картаһы, уның менән мәҙәни сараларға билет һатып алғанда ғына түләргә мөмкин. Быңдай карталар иҫәбенә аҡсаны дәүләт йүнәлтә. Был программа 2021 йылда Рәсәй Президенты башланғысы буйынса эшләй башланы һәм популярлыҡ яуланы. Дүрт ай эсендә унда 3,7 миллион самаһы кеше ҡатнашты, 2 миллиард һумдан ашыуға билеттар һатып алынды.

АФАРИН!

BEIJING 2022

# ПЕКИНДА - ОЛИМПИАДА

**Баҫым ни тиклем көслө булһа, ҡаршылыҡ та шул тиклем арта. Физиканың был ҡанунын Олимпиадаға ҡарата ҡулланырға ла мөмкиндер, сөнки Рәсәйҙе был уйындарҙан ни тиклем генә ситләтергә, флагын һәм гимнын ҡулланырға рөхсәт итмәүгә, ҡыҫҡаһы, спортсыларыбыҙҙың рухын һындырырға тырышыуға ҡарамаҫтан, киреһенсә, беҙҙекеләр тағы ла сәмләнеберәк сығыш яһай. Бөтә Европа ҡаршы торһа ла, Пекинда үтәсәк Ҡышҡы Олимпия уйындарына Ҡытай башлығы хатта Рәсәй Президентын сараны асыу тантанаһына алдан уҡ шәхси саҡырып та ҡуйҙы. Тағы ла ниндәй ҡаршылыҡтар уйлап табырҙар - билдәһеҙ, әммә спортсыларыбыҙ ҡыуандыра.**

Хәйер, Башҡортостан өсөн был Олимпиада асылыу тантанаһы (4 февраль) уҡ ҡыуаныстан башланды - донъя халыҡтары менән таныштырған күренештәрҙә башҡорттарҙың көнкүрешен, милли кейемен, милли уйын ҡоралы ҡурайҙы күрһәткән фото ла үҙ урынын тапты. Ә Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында республикабыҙ 2022 йылғы Ҡышҡы Олимпия уйындарына иң күп спортсылар биреүе менән тарихҡа инде. Дөйөм алғанда, ил намыҫын беҙҙең 14 спортсы, шул иҫәптән ете спортсы "Ағиҙел" хоккей командаһы ҡыҙҙары, "Салауат Юлаев" хоккей командаһынан - Александр Кадейкин, биатлонсы Эдуард Латипов, запаста - Антон Бабиков, шорт-трексы Семен Елистратов, бобслейсылар Ростислав Гайтюкевич, Юлия Беломестных, скелетонсы Александр Третьяков яҡлай.

XXIV Ҡышҡы Олимпия уйындарында барлығы 95 илдән килгән дүрт меңдән ашыу спортсы ике аҙна буйы ете спорт төрөнөң 15 дисциплинаһында (фигуралы шыуыу, шорт-трек, хоккей, керлинг, конькиҙа уҙышыу, бобслей, тау саңғыһы спорты, сана спорты, скелетон, биатлон, саңғы уҙыштары, саңғы икеалышы, саңғыла трамплиндан һикереү, фристайл, сноуборд) 109 комплект миҙал өсөн көс һынашасаҡ.

Олимпиаданың етенсе көнөндә Рәсәй (ROC - Рәсәй Олимпия комитеты) командаһы барлығы 12 енеү яуланы: 2 алтын, 4 көмөш, 6 бронза миҙал алды. 10 февраль беҙҙең өсөн "ҡоро" көн булды - бер генә дисциплинала ла пьедесталға баҫа алманыҡ. Миҙал зачеты буйынса спортсыларыбыҙ һигеҙенсе урында бара, дөйөм миҙалдар һаны буйынса уларҙы Норвегия (13) һәм Австрия (14) уҙып китте. Башҡортостан спортсылары Эдуард Латипов (биатлон) менән Семен Елистратов (шорт-трек) үҙ дисциплиналарында бронза миҙалдарға эйә булды. Фигуралы шыуыу буйынса ошо арала килеп тыуған аңлашылмаусылыҡ барыһын да борсоуға һалғайны. Шөкөр, спортсыларыбыҙ алтын миҙалдарынан мәхрүм ителмәне һәм артабан ҡатнашыу хоҡуғын һаҡлап ҡалды. Был күрһәткестәр көн һайын үҙгәреп тора, әммә Рәсәй спортсылары барыбер үҙҙәренең булдыҡлыҡын күрһәтә!

**Земфира ХӘБИРОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымы күтәрелеүен һиҙгәс тә 2 ҡалаҡ мүк еләген ҡалаҡ менән иҙеп, 2 ҡалаҡ бал ҡушып болғарға. Дауаны көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда берәр ҡалаҡ ҡабул итергә. Хәл тиҙ яҡшыра.

❖ Сепрәкте 5-6 процентлы шарап һеркәһенә манып, 5-10 минутҡа табандарға ябырға. Ҡан баҫымының кимәлен тикшереп тороу мөһим, ул яҡшырғас та дауаны туктатырға кәрәк.

### Үпкә шешеүе

❖ Киптереп ваҡланған әрем үләненең бер семтемен ауыҙға һалып, бер аҙ төкөрөк менән сылатырға һәм йоторға, артынан әҙ генә һыу эсергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда шулай ҡабул итергә.

### Тын ҡыҫылыу

❖ Тын ҡыҫылғанда көнөнә 4 тапҡыр сирек стакан һаҙанаҡ һәм кесерткән төнәтмәһе эсергә кәрәк. Уны әҙерләү өсөн 25 грамм ваҡланған һаҙанаҡ үләне һәм 10 грамм кесерткән япрағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 8 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә.

### Баш ауырыһа

❖ 1 ҡалаҡ болон туҡранбашын 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт тоторға, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ Көнөнә 3 тапҡыр сирек стакан яңы әҙерләнгән ҡарағат һуты эсергә.

### Йүтәл

❖ Татлы тамыр (солодка) йүтәлде бөтөрөргә һәм ҡаҡырыҡты сығарырға ярҙам итә. 1-2 ҡалаҡ ваҡланған татлы тамырҙың тамырына 1,5 стакан һыу ҡойоп, талғын утта 7-10 минут ҡайнатырға, өҫтөн яҡшы ҡаплап, һыуытырға ҡуйырға. Шунан һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр 1-2 ҡалаҡ эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ ***Рәми Ғарипов йәшәгән, ижад иткән осор еңелдән булмаған. Һаман да эҙәрлекләү, ҡыҫыу, йәберләү, милләтселектә ғәйепләүҙәр дауам иткән; Яҙыусылар ойошмаһында ла мөхит ҡатмарлы булған.***

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Ейәнсура районының Сиреғол ауылындағы урын аяғы йәшел һәм алһыу төҫтәргә буялған. Биҙәге ҡара төҫ менән төшөрөлгән. Ул ерлектәге төҫтәр ситенә лә сығып китә. Ҡыя шаҡмаҡҡа оҡшаш фигураларҙан һәм ябай геометрик сюжеттарҙан (аҫҡы арҡыры таҡтала ҡыя һыҙаттар һәм тояҡтарында шеврондар) тыш көньяҡ башҡорттарының ҡайыуҙарында һәм ҡорама ларында йыш ҡулланылған ҡусҡарҙар ҙа төшөрөлгән. Бында йәш үҫентене һынландырған ҡусҡарҙарҙан тыш, алһыу ҡаймалы ҙур булмаған түңәрәктәр ҙә бар.



*Һандыҡ һәм урын аяҡтары. Ейәнсура районы Сиреғол ауылы. 1958 йыл. Рәссамы Г.И. Мөхәмәтшин.*

Йылайыр районы Йомағужа ауылындағы шулай уҡ йәшел һандыҡ аяғының ҡырҙарындағы ҡанаттары юҡ. Алғы яғында ҡап уртала тартма, ул охра төҫөнә яҡын һарыға буялған һәм баҡыр ҡулсаһы бар. Алһыу төҫтәге шаҡмаҡтар эсенә ҡуйы ҡыҙыл һигеҙ тажлы оя биҙәк төшөрөлгән.



*Һандыҡ һәм урын аяҡтары. Йылайыр районы Йомағужа ауылы. 1958 йыл. Рәссамы Г.И. Мөхәмәтшин.*

Көньяҡ Уралда семәрле һандыҡ аяҡтарын тәү сиратта тау һәм Урал аръяғы бөрйәндәрендә, тау ҡыпсаҡтары һәм үҫәргәндәрҙә эшләгәндәр. Иҫке Собханғол, Яңы Монасип, Иҫке Монасип һәм Ағиҙел буйында урынлашҡан башҡа ауылдарҙағы оҫталарҙың эштәре үҙенсәлеклелеге менән айырылып торған. Был ауылдарҙа ҡарағай-ҡыпсаҡ һәм бөрйән ырыуҙары вәкилдәре йәшәй.

Үҙенсәлекле бәләкәй шкафтар, йәғни һикеләр ҙә шул тирәләрҙә йәшәгән башҡорттарҙың көнкүрешенән. В.С. Сыромятников 30-сы йылдарҙа Бөрйән районының Байназар һәм Тимер ауылдарында һүрәткә төшөрөп алған. Был һикеләр урындағы оҫта Хәйрулла Ишбулатовтың ҡул эштәре.

Байназар ауылындағы һике төҙөлөшө буйынса өс өлөшкә бүленгән. Яҡынса ярты яғы ҡаплы, икенсе өлөшөндә кәштәһе асыҡ һәм ҙур булмаған тояғы һырланған. Алғы яҡтағы бөтә таҡталары ла семәрле. Һикенең япмаһы ситтән кәкерсәк биҙәк менән уратып алынған һәм тура дүртмөйөштәргә бүленгән. Был тура дүртмөйөштәр эсендә өс ҡат асамай һыҙыҡ. Аҫҡы ҡаймаһы ҡыя шаҡмаҡтарҙан тора, ситтән һырлы кәрниз эшләнгән. Киң таяуҙарына өс рәт вертикаль һыҙыҡтар, асамайлы тура дүртмөйөштәр һәм һигеҙ өлөшкә бүленгән түңәрәктәр эшләнгән. Геометрик фигуралар һәм һыҙыҡтар тамғалар кеүек, ниндәйҙер тәрән мәғәнәһе барҙыр төҫлө. Ошондай дөйөм фонда һикенең ҡаплы өлөшөндә эшләнгән өй һәм ағас һүрәттәре шундай тәбиғи күренә.



*Һике. Бөрйән районы. В.С. Сыромятников альбомынан. БХМ архивынан*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

МИНЕҢ РӘМИ



# УНЫҢ БӨРӨЛӘРЕНЕҢ БЕРЕҺЕМЕН

**Рәми ағай үҙенең 1972 йылда яҙған көндәлектәрендә: "Ғүмеремдең яртыһын (ә уға 40 йәш!) ниңә мин иләк менән һыу ташып үткәрҙем икән? Шул шиғырҙарҙы тәржемә итеп кенә лә мин күпме файҙа эшләр инем!.. Юҡ, ҡырҡҡа еттем, аҡылға ултыра аманым", - тип яҙа.**



Ә бына 1968 йылда, "Аманат" исемле шиғырҙар китабын әҙерләп, Башҡортостан "Китап" нәшриәтенә тапшырғас, көндәлегенә яҙған юлдары: "Ә шулай ҙа был донъянан берәй эш эшләнем тип китке килә. Иң аянысы - бушҡа ҡорбан булыу. 18 йыл! Бер кешенең ғүмере... Ә үҙемә ҡалһа - лириканы бар иттем тигән булам - һис бер ялғанһыҙ. Хәйҙән һуң, Мәлих Харистан һуң... Ә Мостай ағай? Ә минең, исмаһам, Рауилдарым, Тимерҙәрем, Мөхәмәттәрем, Хәсәндәрем, тағы әллә күпме бөрөләрем бар... (Рәшит кенә ауырыу, зато - гений). Юҡ, минең 18 йылым, бәлки, ул тиклем бушҡа ла үтмәгәндер. Мин бит, күҙгә күренмәҫ булһам да, аҫтыртын ғына булһа ла - бөтәһен дә биргәнмен. Тик үҙемде таба алһам ине. Ҡайҙа икән мин? Бәлки, мин юҡтыр ҙа. Тик намыҫым ғына бар, саф. Мин - әҙәбиәтебеҙгә хыянатһыҙ..." (1968, 14 июнь).

Был юлдарҙан Рәми ағайҙың башҡорт әҙәбиәтенә килгәндән алып (1950 йыл) үткән 18 йылда үҙенең әҫәрҙәрен, йәғни шиғырҙарын ғына яҙып йөрөмәгәнен, ә әҙәбиәткә хеҙмәт иткәнен, әҙәбиәтебеҙҙе үҫтереүгә бөтәһен дә биргәнлеген аңларға була. Әҙәбиәткә инде китмәҫкә килгән шәкерттәренән бары бишәүһен генә атаһа ла (Рауил Бикбаев, Тимер Йосопов, Мәхәммәт Илбаев, Хәсән Назар, Рәшит Назаров), "тағы ла әллә күпме бөрөләрем бар" тип асыла, күңелен йыуата, өмөтөн өҙмәй.

Рәми ағайҙың бына ошо "әллә күпме бөрөләрем бар" тигәнендә уның әҙәбиәткә килеүсе йәштәр менән даими рәүештә бәйләнештә булыуы, аралашыуы, хаттар яҙыуы, уларҙың шиғыр шәлкемдәрен әҙерләп баҫтырыуы, ҡулъяҙмаларына баһаламалар яҙыуы, төрлө-төрлө кәңәштәр биреүе (тормош, ижад буйынса һ.б.) - уның арымай-талмай, йыбанмай-ялыҡмай ваҡытын бүлеүе, йәш әҙиптәрҙе ысын мәғәнәһендә ҡайғыртыуы, хәстәрләүе күренә лә инде. Рәми ағайҙың ана шул "бөрөләре"нә яҙған хаттары, рецензиялары һәм йәштәрҙең шиғырҙарына яҙған баш һүҙҙәренә - фатиха биреүенә ҡарап та ул "бөрөләр"ҙең кемдәр икәнен билдәләп, исемдәрен тергеҙеп була. Бына "Рәми бөрөләре"нең ҡайһы берҙәре: Рәшит Әхтәров, Нур Хәбиров, Ғәли Ильясов, Мәрйәм Биктимерова, Сафуан Әлибаев, Әнисә Таһирова, Ҡәҙим Аралбаев, Мәүлит Ямалетдинов, Гөлфиә Юнысова, Таңһылыу Ҡарамышева, Рәмзилә Хисаметдинова, Вафа Әхмәҙиев, Земфира Муллағәлиева, Зөбәржәт Йәнбирҙина, Аҫылғужа Баһуманов, Динис Бүләков, Флорида Әхмәтова, Зилиә Ҡужабәкова, Венер һәм Рәмил Йәнбәковтар һ.б.

Рәми ағай 1964 йылдың 7 ғинуарында көндәлегендә бик күңелһеҙ уйҙарын яҙа. "Һабантурғай йырҙары" йыйынтығын Башҡортостан "Китап" нәшриәтенә илтеп биргәс: "Ярай, бөгөн китаптан ҡотолдом әле. Өҫтән бер тау төшкәндәй булды. Тик китап сығарыуҙың инде ҡыҙығы ла ҡалманы, - тип дауам итә шағир. - Үҙең теләгәнсә сығарыу мөмкин түгел. Биш йыллыҡ эште 2 табаҡҡа һыйҙырырға кәрәк. Алдан уйлаған уй бөтөнләй юҡҡа сыҡты... Китап сығарыуҙан хәҙер беҙҙә таштан май һығып сығарыу еңелерәктер. Планды торған һайын ҡыҫа баралар, ҡыҫа баралар... Әллә ниндәй яҙмышҡа юлыҡты инде был башҡорт..." ("Көндәлектәр", 344 б. 2012 й.).

Рәми Ғарипов йәшәгән, ижад иткән осор еңелдән булмаған. Һаман да эҙәрлекләү, ҡыҫыу, йәберләү, милләтселектә ғәйепләүҙәр дауам иткән; Яҙыусылар ойошмаһында ла мөхит ҡатмарлы, шик-шөбһәле, шикәйәттәрҙән арынмаған мәл булған. Өлкә Комитетына саҡырып, "тәрбиә" эше лә алып барылған.

1964 йылдың 11 мартында КПСС-тың Өлкә Комитетында Рәми Ғариповтың "милләтселек" мәсьәләһен тикшереү үткәрелә. Ундағы һөйләшеүҙән ҡайтҡас, Р. Ғарипов көндәлектәренә шуны теркәп ҡуйған: "Минең халҡым бар. Уның ауыр, ҡатмарлы тарихы бар, уның яулап алған хоҡуҡтары, киләсәге бар. Мин тик уның Октябрь биргән ошо хоҡуҡтарынан тулыһынса файҙаланыуын, бер кемдең дә уға бысраҡ ҡулын һуҙмауын, бер кемдең дә уны мыҫҡылламауын, уның исеме менән һатыу итмәүен генә һәм уның шағирҙарының 5 йылға 2 табаҡлыҡ китап сығарырға зар-интизар булып йөрөмәүен генә теләйем".

Башҡорт шиғриәтендә Р. Ғарипов үҙенән аҙаҡ килер бик күп быуындарға ҡабатланмаҫ өлгө, поэтик лидер, шәхес булараҡ рухиәтебеҙ күгендә яҡты эҙ ҡалдырҙы. Шиғриәткә Рәми фиҙаҡәрҙәрсә бирелгән ине, һәм шундай булып ҡалды, башҡорт шиғриәтен фәлсәфәүи тәрәнәйтте, лирик йәһәттән хискә сорнаны, илгә тоғролоҡта, илһөйәрлектә бер башҡа юғары күтәрҙе. Рәми Ғарипов ижады, уның барлыҡ әҙәби мираҫы, бөгөнгөнән киләсәккә ҡыйыу үтәсәк, килер быуындар уҡыусыһын яҡтылыҡҡа, милләт мәнфәғәте хаҡына изгелеккә, ғәҙеллеккә, матурлыҡҡа, берҙәмлеккә һәм татыулыҡҡа саҡырып торасаҡ. Башҡорт халҡының киләсәктә күпме быуаттары булһа, Рәми Ғарипов шиғриәтенең дә шунса ғүмере буласаҡ.

*Тел тыуҙырған халҡым -*
*Бөйөк бер тел!*
*Теле үлмәҫ, үҙе үлмәһә.*
*Үҙе үлмәҫ, күрер киләсәкте*
*Үҙен-үҙе ергә күммәһә!..* - тип яҙҙы ул 1972 йылда үҙенең үлемһеҙ шиғырҙарының береһендә.

Эйе, бөгөн дә бөйөк шағир-мәғрифәтсе М. Аҡмулла, Ш. Бабич, М. Кәрим, Н. Нәжми, З. Бишева һәм Р. Ғарипов яулаған кимәлде төшөрмәҫкә, Р. Ғарипов яулаған тел, рух, милли тойғо традицияларын дауам итеү маҡсаты менән янып ижад итә ҡәләмдәштәребеҙ. Рухҡа тоғролоҡ - ул халҡыңа тоғролоҡ, Рәми рухына тоғролоҡ тигән һүҙ. Шиғриәттә ең һыҙғанып, йөрәк һыҙлатып ижад итеүсе ҡәләмдәштәремдең ижад кредоһы, уй-ниәттәре, изге маҡсаттары шундай.

**Ҡаялағы Ҡайындың өҙгөләнгәне:**
(Поэманан өҙөк)

*- Мин тыңланым уны төнө буйы,*
*Ул бер тынғыһыҙ зат ине лә.*
*Ҡаратауҙың менде үркәсенә,*
*Йонсоуына китмәй иҫе лә.*
*Мине яҡын күрҙе микән инде -*
*Миңә яҡын ятты терәлеп.*
*Ә юлдашын һалды ситтәнерәк,*
*Үҙе көлә ихлас, ирәбе:*
*"Минең, - тине, - Әғзәм, йоҡлағанда*
*Насар ғәҙәтем бар - тулайым,*
*Осормон да аҫҡа*
*Берәй ташҡа*
*Эленеп торормон тип уйлайым..."*
*Ятҡас та ул тынғы табалманы,*
*Табып алып ҡоро аҡ туҙҙы,*
*Көйрәп ятҡан усағына барып,*
*Тәмәкеһен нисә ҡабыҙҙы...*

*Ташҡа сат йәбешеп үҫеүемә*
*Һоҡланғанын уның күрһәгеҙ! -*
*"Әғзәм! Ҡара әле, шул ҡаҡ ташта*
*Тамырҙарын нисек үргән ул!..."*

*Мин ултырам һаман шул ҡаяла,*
*Япраҡтарым көнгә кинәнә...*
*Суҡтарымда сыңлай -*
*Киткәнендә*
*Шиғыр уҡығайны миңә лә!..*
*Ҡояш балаһына тиңләп мине*
*Бик ҙурланы. Күккә тейгәйнем!..*
*"Ҡайын һис тә ташҡа тотонмаған,*
*Ташты ҡоршап тора..." тигәйне.*
*Нисә яҙҙар уҙҙы...*
*Туҙым туҙҙы...*
*Ваҡыт ниҙе генә йыҡманы!*
*Килгәндәргә йырлар йырым ҡалды:*
*"Арҡа терәп Шағир йоҡланы..."*

**Ҡәҙим АРАЛБАЙ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры, "Рәми бөрөләре"нең беренсе быуыны вәкиле.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# КҮБӘЛӘКТӘР, ТИЛӘҮҘӘР, ҠЫУАҠАНДАР -

## көнсығыш башҡорттары булабыҙ



**Күбәләк, ҡыуаҡан һәм тиләү ырыуҙары ауылдары, башлыса, республикабыҙҙың Учалы, Әбйәлил һәм Белорет (1 генә ауыл) райондары территорияһында нигеҙләнгән. Ҡасандыр хәҙерге Силәбе өлкәһендәге, Тарихи Башҡортостан территорияһындағы ҡыуаҡан ауылдарының (шул иҫәптән, ҡыуаҡан тармағы түбәләстәрҙең) боронғо аҫаба ерҙәре батша чиновниктары тарафынан заводтар һалыу маҡсатында тартып алынған, ауылдары юҡҡа сыҡҡан. Әлеге ваҡытта ҡыуаҡандарҙың элекке ерҙәрендә Силәбе өлкәһенең Һатҡы ҡалаһы һәм районы, Сулея станцияһы, Йүрүҙән, Межевой Лог, Златоуст ҡалалары урынлашҡан. Ә хәҙерге Салауат районының Баш-Илсекәй, Ҡалмаҡкол, Яңы Сөрөкәй, Тирмән, Урмансы ауылдарына ҡыуаҡандарҙың яҡын ҡәрҙәштәре - түбәләстәр нигеҙ һала.**

Әле аталған башҡорт ырыуҙары әлдә ни ҙурҙарҙан түгел, этнология фәнендә улар оло Табын ырыуының айырымланып, үҙаллы көн итә башлаған тармаҡтары итеп ҡуҙаллана. Улар хәҙерге Башҡортостан Республикаһының көнсығыш зонаһын биләй. Ғөмүмән, Тарихи Башҡортостан территорияһында таралып йәшәгән оло табын башҡорттары этносәйәси берләшмә булған, әммә этногенетик сығыштары буйынса улар бер-береһенән ярайһы уҡ айырылып тора.

Башҡорттарҙың тарихи хәтерендә, шәжәрәләрендә шул уҡ күбәләктәр, уларға йәнәш йәшәүсе тиләүҙәр төп башҡорт ырыуҙары иҫәбенә индерелә: XIX быуатта ижад иткән башҡорт яҙыусы-мәғрифәтсеһе, күренекле дин әһеле Таджетдин Ялсығол шәжәрәһендә башҡорттоң төп бабаһы Иштәктең аҫыл нәҫелдәре исемлегендә Күбәләк һәм Түбәләс бабалар тамъян, үҫәргән, бәкәтун, һарт, тырнаҡлы, дыуан башҡорттарының иң яҡын ҡәрҙәштәре итеп һанала.

Ғалим-этнолог Р.Ғ. Кузеев күбәләк ырыуын оло табын ҡәбиләһенең бер тармағы, тип иҫәпләй. Ул күбәләктәрҙең килеп сығышы хаҡында мәғлүмәттәр таба алмаған, әммә боронғо риүәйәттәрҙең береһендә Күбәләк һәм Тиләү исемле ир-егеттәрҙең бер туған булыуҙары хаҡында бәйән ителеүен иҫкә ала. Ошондай риүәйәттәрҙең береһендә Баймөхәмәт исемле ҡарттың тол ҡалған ҡатынының бер мосафир менән осрашҡандан һуң, буйға уҙып, бала табыуы хаҡында һөйләнелә. Был ҡарттың Айбағыш һәм Көнбағыш тигән уландары, һунарҙан йөрөп ҡайтҡас, баланы күрәләр һәм ошолай тип әйтәләр: "Был бәпес үҙе күбәләк кеүек кенә икән, исеме лә Күбәләк булһын әйҙә". Ул ағайҙарының ерҙәрендә йәшәй, унан таралып киткән быуындар ҙа күбәләктәр, тип атала башлай.

Башҡорт риүәйәттәрен ысынбарлыҡта ҡасандыр булып үткән хәл-ваҡиғаларҙың фольклорҙағы сағылышы рәүешендә ҡарау фарыз. Шул уҡ Күбәләк исемле кешенең исеме лә тарихи сығанаҡтарҙың береһендә теркәлеп ҡалған. Тарихсы Ә.З. Әсфәндиәров былай тип яҙа: "Тиләү улусынан (Телевская волость) Бабиш Аслаевтың 1680 йылда яҙылған үтенесенән уның сығышы буйынса нуғай кешеһе булған Күбәләк исемле бабаһының XVI быуат аҙағында - XVII быуат башында Табын улусында припущенник булыуы беленә. Ғаризнамә яҙыусы Бабиш үҙе лә, уның атаһы ла припущенниктарҙан була. Һалынған яһаҡтың бер өлөшөн түләү шартында уларға аҫаба ерҙә (табындар ерендә. - **Авт. иҫк.**) йәшәргә рөхсәт ителә. Ошо кешеләрҙең варистары, аҫабалыҡ хоҡуғы алып, табын общинаһы ерҙәренә бер өлөшөнә хужа булыуға өлгәшә. Шулай итеп, Күбәләк улусына - ырыу биләмәләренә нигеҙ һалына. 1722 һәм 1733 йылдарға ҡараған документтарҙа Нуғай даруғаһында Күбәләк улусы иҫәпкә алына. Себер даруғаһында шулай уҡ Күбәләк-Табын улусы була".

Әлбиттә, Күбәләк ырыуы атамаһының антропоним, йәғни Күбәләк исемле нуғай кешеһе менән бәрмә-бәр бәйле булыуы тарихи ысынбарлыҡҡа тап килә. Әммә ошо яңы башҡорт улусы халҡының бары тик Күбәләк вариҫтарынан ғына хасил булыуын раҫлау дөрөҫ булмаҫ ине. Нуғай кешеһе Күбәләктең ейәне Бабиштың Тиләү улусында йәшәүе, риүәйәттәге Күбәләк менән Тиләүҙең бер туғандар булыуы хаҡындағы мәғлүмәттәр, XVIII быуат башында Күбәләк улусының Нуғай даруғаһына ҡарауы, һуңынан күбәләктәрҙең Себер даруғаһының Табын улусына күсеп килеүе уларҙың ата-бабаларының оло Табын ҡәбиләһе менән борондан уҡ этник бәйләнештә йәшәүенә дәлил булып тора. Тап шуның өсөн Күбәләк улусы башҡорттарының табын сығышлы булыуы, бында ошо оло ырыу тармаҡтары вәкилдәренең быуаттар буйына ҡан-ҡәрҙәшлектә көн итеүе тарихи ысынбарлыҡҡа тап килә.

Әммә күбәләктәрҙең этногенетик маркерҙары бер иш түгел. Уларҙың бер өлөшө N1c1-M178 гаплотөркөмөнә ҡарай. Уларға күрше йәшәүсе түңгәүерҙәрҙең дә төп гаплотөркөмө шул уҡ. Күбәләк башҡорттарының икенсе бер төркөмөнөң гапломаркеры - G2a1-P303, ә был гаплотөркөмгә Кавказда йәшәүсе осетин-дигор һәм ирондар ҙа инә. Тимәк, Күбәләк бабаның нуғайҙарҙан булыуы, үҙ сиратында уның ата-бабаларының Кавказ ерлегендә йәшәүсе халыҡтар менән тығыҙ этник бәйләнештә йәшәүе хаҡ булып сыға. Әлбиттә, R1a-M198 маркерлы башҡорттарҙың да күбәләктәр араһында булыуы асыҡланған - ә был табын ырыуы башҡорттарының төп гаплотөркөмө.

Күбәләк ырыуы башҡорттарының бөгөнгө вариҫтары Әбйәлил районының Аһылай (Аслай), Байым, Балапан, Яңы Балапан, Оло Ғәбдин, Йәнекәй, Моракай, Рәхмәт, Туйыш, Яйҡар, Белорет районының Абҙаҡ, Учалы районының Баттал, Ҡаҙаҡкол, Ҡарағужа (был ауыл юҡ инде), Ҡобағош, Оҙонкүл ауылдарында йәшәй.

Әкүбәләктәр менән йәнәш йәшәүсе тиләүҙәрҙең этнонимы, башҡорттарҙан башҡа, нуғай, ҡаҙаҡ (телеу), ҡүсмә үзбәк (тиләү), ҡарағалпаҡ (тилеукусши) халыҡтарының этник номенклатураһына инә. Этнографик тикшеренеүҙәргә ярашлы, тиләү ырыуы һәм уның тармаҡтары сығышы менән VI быуатта уҡ Төрки ҡағанатында билдәле булған боронғо теле ҡәбиләһенә ҡарай. Теле ҡәбиләләр берләшмәһе Ҡытай хроникаларында, мәҫәлән, "Суй-шу" хроникаһында (VII б.) телгә алына: "Телестарҙың ата-бабалары Хунну тоҡомдарынан, ырыуҙары иң күптәрҙән. Көнбайыш Диңгеҙенән көнсығышҡа табан, тау үҙәндәрендә, һәр ҡайҙа ла оҙайлы йәшәйҙәр. Дулойылғанан төньяҡҡараҡ "пугу", "тунло", "вэйхэ", "басгу", "фуло" бер үк ваҡытта "сыцзинь", "мэнчэнь", "тужухэ", "сыцзе", "хунь", "хусюэ" тип йөрөтөлгән һәм башҡа бик күп ырыуҙар йәшәй, улар ике мәртәбә 10-ар меңлек ғәскәр йыя ала. Иунан көнбайышҡа, Яньцинан төньяҡҡа, Аҡ тауҙарға яҡын, "чиби", "булочжи", " иде", "супо", "нахэ", "уяньгуань", "хэгу", "еде", "юниаяньгуань" тоҡомдары йәшәй, улар шулай уҡ ике тапҡыр 10-ар меңлек ғәскәр йыя ала. Алтын тауҙарынан көньяҡ-көнбаштараҡ "сюеяньто", "делээр", "шипань", "дачи"лар йәшәй, улар 10 меңдән артығыраҡ яугирҙар йыя ала. Адэ-йылғаға яҡын булған "Тыныс илдән" башлап хэдэ, хэшэнь, боху, бигань, цзюйхай, хэбиси, хэцосу, баевэйкэдаларҙың өс тапҡыр 10-ар меңлек ғәскәре бар. Дэни диңгеҙенән көнсығышта һәм көнбайышта сулоцзе, саньсое, мицу, лунху - ырыуҙары күп, 8 меңдән артығыраҡ яугирҙары бар. Фулиндан көнсығышҡа - эньчу, алань, божуцзюли, фувахундар ике тапҡыр 10-ар меңлек кеше. Төньяҡ Диңгеҙенән көньяҡҡа табан "Дубо". Ырыу атамалары төрлөсә булған хәлдә лә, улар, тулайым алғанда, телестар".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

А.А. Сарыгин 1949 йылдың 6 ғинуарында БАССР Юғары Советы Президиумына яҙған хатында бына ниндәй мәғлүмәттәр бирә: "1943 йылдың 23 февралендә таңға табан 7-се гв. кавкорпусы составында булған 16-сы гв. кавдивизияһы, авангардта барып, дошман тылындағы тәрән рейдтан сыҡҡан саҡта уның көстәренең бер өлөшө Ворошиловград өлкәһенең Юлино ауылы янынан үтте (Бында Юлино - II утары хаҡында һүҙ бара. - **Авт. иҫк.**). Был саҡта дивизия штабы Юлино ауылында урынлашып, алдараҡ барған частарҙан дошман көстәре һәм уларҙың ҡайҙа булыуы хаҡында донесение көтә ине...

Артиллерия һәм обоздар Юлиноға етеп килә. Тиҙҙән Юлиноға корпус командиры генерал-майор Борисов етәкселегендә корпус штабы ла килеп етте. Әйтергә кәрәк, рейд барышында корпус штабы һәр саҡта ла беҙҙең дивизиябыҙ частары торған урында булды, күп осраҡта дивизия штабы менән бер үк ауылда урынлашып, маршта 16-сы кавдивизия штабы артынан юлланды. Корпус штабы килеп еткәндә, дивизия штабы офицерҙары урамда ине, улар емерелгән өйҙәр эсенә инеп ышыҡланып, беренсе сигнал буйынса алға ҡуҙғалырға әҙер торҙо. Генерал-майор Шайморатов хатаға ингәйне. "Бында кемдәр һуң, һеҙ бында ни эшләйһегеҙ?" - бында килеп еткән генерал Борисовтың тәүге һүҙҙәре ошолар булды. Бында дивизия штабы булғанлығын белгәс, ныҡ итеп һүгенә башланы: "Ни өсөн алға бармайһығыҙ... минең бойороғомдо үтәмәйһегеҙ..., ҡайҙа генерал Шайморатов?" - һәм ул күрһәтелгән хатаға, генерал Шайморатов янына инеп китте, унда ҡырағай бер күренеш була (мин ул хаҡта дивизия контрразведкаһы начальнигы майор Кузнецовтан белдем).

Ҡорал менән янап, иҫерек генерал Борисов, корпус штабы начальнигы полковник Сабуров һәм корпус контрразведкаһы начальнигы генерал-майор Шайморатовты, бойороҡто үтәмәүҙә - корпус частарын дошман ҡамауынан сығарыу операцияһын өҙөүҙә тупаҫ рәүештә ғәйепләнеләр.

Урамға сығыу менән, генерал Борисов корпус штабы начальнигы, полковник Сабуровҡа күрһәтмә бирҙе: "Алға барырға, алда дошман юҡ, Шайморатов корпус штабы менән ышыҡланһын әйҙә!" Был һүҙҙәр Борисов тарафынан дивизия һәм корпус штабы офицерҙары алдында әйтелә, ә унан алдараҡ генерал-майор Шайморатов команда биреп өлгөргәйне инде: "Аттарығыҙға атланығыҙ, минең арттан, алға!" - һәм ул беренсе булып атына һикерел менде. Шунда уҡ дивизия штабы штаб подразделениелары менән беҙҙең колоннаға килеп ҡушылды".

Хәрби табип Сарыгиндың ошо хатында яҙылғандарҙы һуғыштан иҫән-һау ҡайтҡан С.Р. Ҡадировтан башҡа дивизияның Махсус бүлеге начальнигы, гв. майоры М.И. Кузнецов та раҫлай. Ул да үҙ сиратында 1943 йылдың 23 февралендә булып үткән ваҡиғалар хаҡында БАССР Юғары Советы Президиумы исеменә хат менән мөрәжәғәт итә.

Шулай уҡ ҡанлы һуғыштан имен-аман ҡайтҡан, ошо ваҡиғалар шаһиты булған бәгзе бер яугирҙарыбыҙ 23 февраль иртәһендә ятраҡтан генералдарының комкор Борисов янынан ҡара көйөп сыҡҡанын, уның һәр саҡта ла рух ныҡлығы сағылған йөҙөнөң ҡараңғыланғанын күргән.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Ижадсы, рәссам булып формалашыуыма башҡортса уҡыуым да ҙур йоғонто яһағандыр, тим. 1968 йылда Өфөләге 91-се мәктәптә башҡорт класы асылғайны. Баш ҡалалағы беренсе башҡорт класының уҡыусыһы булдым мин.*

# АТАЙЫМДЫ

## тимәк, ул юҡҡа

**Февраль башҡорт донъяһына Рәми Ғариповты биргән ай, ағайҙы беҙҙең аранан алып киткән ай ҙа февраль. Быйылғы февралдә шағирға 90 йәш тулған булыр ине... Ошо ваҡиға уңайы менән Рәми Ғариповтың балаларын - рәссам, Өфө ҡалаһының 2-се художество сәнғәт мәктәбе уҡытыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Азамат ҒАРИПОВ менән Нариман Сабитов исемендәге 1-се балалар музыка мәктәбе уҡытыусыһы, концертмейстер, шулай уҡ Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Гөлнара ҒАРИПОВАны редакциябыҙға саҡырҙыҡ һәм уларҙың аталары тураһындағы хәтирәләрен тыңланыҡ.**

**Атай-әсәйҙәр, ғәҙәттә, балаларын да үҙ һөнәренә йәлеп итеүсән. Рәми ағай ҙа һеҙҙе, моғайын, ижад кешеләре итеп күрергә теләгәндер. Һәр хәлдә, һеҙҙең сәнғәт донъяһында хеҙмәт итеүегеҙ, берегеҙҙең - рәссам, икенсегеҙҙең музыкант булыуығыҙ юҡҡа ғына түгелдер?**

**Азамат:** Атайым һүрәт төшөрөүемде хуплай ине. Был оҫталыҡ атайымдың үҙендә лә, уның бер туған ҡустылары Рауил менән Урал ағайҙарҙа ла бар ине. Салауат ағайым да оҫта ғына рәссам ине, тик ул икенсерәк йүнәлештәге һөнәр һайланы. Алтынсы класта уҡығанда атайым мине танылған рәссам Әхмәт Лотфуллиндың оҫтаханаһына алып барғайны. Шунда Әхмәт ағай минең һүрәттәремде ҡарап, кәңәштәр бирҙе. Рәссам үҙе лә беҙҙең өйгә йыш килә ине, уның гел генә, хатта сәй эскәндә лә, блокнотына нимәлер сыймаҡлағаны иҫемдә ҡалған. Минең дә бәләкәй саҡтан үҙем менән блокнот йөрөтөү ғәҙәтем булды, унда мин йәнһүрәттәр төшөрә инем. Ул блокноттарым ҡайҙалыр юғалып бөттө инде хәҙер.

Рәссамдар, ғәҙәттә, ниндәйҙер бер аныҡ йүнәлештә эшләй бит инде, ә мин иһә иллюстрацияны үҙ иттем. Китаптар араһында үҫтем һәм бөгөн дә уҡытыу эше менән бергә китаптарҙы һүрәттәр менән биҙәйем.

Минең ижадсы, рәссам булып формалашыуыма башҡортса уҡыуым да ҙур йоғонто яһағандыр, тим. 1968 йылда Өфөләге 91-се мәктәптә башҡорт класы асылғайны. Баш ҡалалағы беренсе башҡорт класының уҡыусыһы булдым мин. Ә 3-сө класҡа иһә беҙ яңы асылған 20-се ҡала башҡорт мәктәбенә уҡырға барҙыҡ. Ошо мәктәптәге үҙенсәлекле мөхит үҫтерҙе, тәрбиәләне, илһөйәр итте беҙҙе. Иң мөһиме, бында табылған дуҫтар ҙа бер көнлөк йә бер айлыҡ түгел, ә мәңгелек. Беҙ бөгөн дә аралашып, бер-беребеҙгә терәк булып йәшәйбеҙ.

**Гөлнара:** Әйткәндәй, 20-се ҡала башҡорт мәктәбен асыуҙа беҙҙең атайҙың да роле ҙур. Оло ҡаршылыҡтарға ҡарамайынса, баш ҡалала милли интеллигенцияның балаларын уҡытыу өсөн мәктәп астырыуҙы юллап йөрөгән бер нисә кеше араһында атайым да була...

Беҙ ғаиләлә өс бала үҫтек, өсөбөҙ ҙә был тормошта үҙ юлыбыҙҙы тапҡанбыҙ. Беҙҙең ғаиләлә юғары белем алыу мотлаҡ тип һаналды. Азамат ағай тәүҙә педагогия училищеһының художество-графика бүлеген, аҙаҡтан педининститутта ошо уҡ бүлекте тамамланы. Атайым да, әсәйем дә Азамат ағайымдың рәссам булыуын теләй ине. Әммә ағайымды күберәк педагог эше үҙенә ылыҡтырҙы һәм бөгөн мин бының юҡҡа түгел икәнен күрәм. Уны уҡыусылары шул тиклем ярата, ихтирам итә. Үҙең белгәнде башҡаларға тапшырыу һәм унан оло ҡәнәғәтлек алыу - үҙе ҙур бәхет.

Минең музыка юлынан китеүем тураһында һөйләгәндә бер ваҡиғаны мотлаҡ иҫкә алырға кәрәктер. 1969 йылда, минә өс йәш булғанда, атайымдың "Аманат" тип исемләнгән шиғырҙар китабы баҫылып сыҡҡан. Уның гонорарына атайым ике ҙур әйбер - пианино һәм телевизор һатып алған. Былай ҙа осон-осҡа ялғап йәшәгән мәлдә пианино һатып алсы әле! Был инструменты барыһы ла яратты һәм бөтәбеҙ ҙә унда уйнап ҡарай инек. Ғөмүмән, беҙҙең өйҙә гел музыка яңғырап торҙо, әсәй йырлап ебәрә торғайны.

Минең музыкант булып китеүем барыһы өсөн дә көтөлгән хәл булғандыр, атайым да теләгәндер быны, тим. Беренсе класҡа уҡырға 20-се ҡала башҡорт мәктәбенә барһам да, 2-се кластан Өфө сәнғәт академияһы эргәһендәге Урта махсус музыка мәктәбендә уҡый башланым. Унан һуң Өфө сәнғәт институтының фортепьяно бүлегендә уҡыным. Уҡып йөрөгәндә уҡ Музыкаль тәрбиә буйынса бирешле мәктәбендә (хәҙерге Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаты) эшләй башлағайным, оҙаҡ йылдар эшләнем унда.



**Азамат:** Салауат ағайыбыҙ 8-се кластан шулай уҡ 20-се ҡала башҡорт мәктәбендә тамамланы. Ағайымдың холҡо бик үҙенсәлекле, үҙенә лә, башҡаларға ла талапсан, ғәҙел, тура һүҙле ине. Бала саҡта ҡурайҙа бик шәп уйнай ине, шуға ла 8-се класты тамамлағас, атайым уның Өфө сәнғәт училищеһына ҡурай класына уҡырға инеүен бик теләгәйне лә, әммә әсәйебеҙҙең һүҙе өҫкә сыҡты: ағайым радиотехник техникумды һайланы. Ул гел эшләп үҫте, йәй буйына археологик экспедицияларға йөрөнө. Әле лә хәтеремдә, беренсе эш хаҡына үҙенә сәғәт, минә саңғы, атайға, әсәйгә бүләктәр һатып алғайны. Шулай итеп, минең алтынсы класта бик шәп йүгереү саңғылары булды, бының өсөн ағайыма ныҡ рәхмәтлемен. Ул беҙгә аҙаҡтан да матди яҡтан ныҡ ярҙам итте. Уҡыуҙы тамамлағас та Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡҡа эшкә китте. Салауат ағай тәбиғәте менән ауыл малайы булды. Егерме йәшендә район элемтә бүлеге начальнигы итеп тәғәйенләнгәс, үҙен тулыһынса эшкә бирҙе. Эшкә сәмсел ине, ялҡауҙарҙы, эскелек менән мауығыусыларҙы бөтөнләй яратманы. Һуңынан уны Учалы районына эшкә күсерҙеләр. Атайым үлгән йылда ағайым Мәсетлелә эшләп йөрөй ине әле. Көндәлектәрендә яҙыуынса, һуңғы икмәген ашайһың, кемдең һыуын эсәһең, етмәһә, үҙең дә ситтән килгәнһең", тип, ауыҙына аҙыраҡ ҡар тултырып, "аңлатыу эштәре" алып барырға тура килде. Ә улым быларҙың барыһын да ишетеп торҙо бит, аҙаҡтан: "Атай, беҙҙең дә бәке бар ҙа инде", - тиғән була. Уның өсөн милләтендә мыҫҡыл итеүселәргә яуапһыҙ ҡалырға ярамағанлығын аңлатыусы һабаҡ булды инде был.

**Гөлнара:** Әйткәндәй, Азамат ағайҙы педининститутта уҡыған сағында "Аҡыл, намыҫ, выждан" тип йөрөтәләр ине. Мин үҙем дә асылыма ҡаршы килгән ваҡиғаларҙа ҡатнашыуҙан ҡырҡа баш тартам һәм: "Беҙҙә, ғариповтарҙа, былай эшләмәйҙәр", - тип аңғартып ҡуям.

**Рәми ағай баҡыйлыҡҡа күскән мәлдә берегеҙгә - ун алты, икенсегеҙгә ун йәш кенә булған. Ә шулай ҙа атайығыҙ менән үткәргән мәлдәрҙе, ҡайһы бер атай һабаҡтарын хәтерләйһегеҙҙәр?**

йәшәй күнелдә. Йәмәғәт кешеһе булды, сәйәсәттән дә алыҫ торманы. Уның кеүек үтә ғәҙел, дөрөҫлөктө генә яҡлаусыларҙы бөгөп булмай, һындырып ҡына була торғандыр. Атайым бөтәһенә лә бер төрлө ҡараны, үҙенә лә, дуҫтарына ла талапсан, ҡаты булды, көндәлектәрендә улар адресына ла ҡаты ғына әйтелгән урындар бар.

**Гөлнара:** Салауат ағайымдан һуң ғаиләбеҙҙә Лилиә тигән ҡыҙ бала тыуа, ләкин ул йәше лә тулмайынса, ауырып үлеп ҡала. Шуға ла мин тыуғас, атайҙың бөтөн һөйөүе минә күсә. Мин быны бик яҡшы тоя һәм белә инем. Малайҙар менән ул ҡатыраҡ булды, ни тиһәң дә, ир тәрбиәһе бирергә тырышҡандыр. Ағайымдар менән тарткылашып, үсегешеп китәбеҙ ҙә, мин атайҙың бүлмәһенә инеп йәшеренәм, ә ағайымдарға унда инергә ярамай. Бәләкәй саҡта минә атайҙың бүлмәһендә йоҡлап китеү оҡшай ине. Уның ҡулдары менән йомшаҡ ҡына итеп битемдән һыйпап йоҡлатыуы хәтерҙә ҡалған. Бүлмәгә гел тыуған көнө менән атайҙы Салауат ағайҙан башҡа бер кем дә ҡотламаған... Хәҙер ағайым да юҡ инде...

**Замандаштары Рәми ағайҙы үҙ милләте, теле, халҡы яҙмышы һәм намыҫы өсөн утҡа-һыуға инер ҡыйыу кеше итеп белә. Яҙғандарының гәзит-журналдарҙа баҫылмауы, эшкә ҡабул итмәүҙәр, шул арҡала матди мохтажлыҡта йәшәү - былар барыһы ла уның ошо ҡыйыулығына, тура һүҙлегенә, күрәшсе рухына бәйле лә инде. Ә бына Рәми ағайҙың улдарында ла бармы икән бындай ҡыйыулыҡ?**

**Азамат:** Белмәйем, беҙҙең ҡыйыулыҡты атайҙыҡы менән сағыштырып буламы икән? Атайым бит милләттең яҙмышы хәл ителгәндә партияның Өлкә комитетындағы иң юғары түрәләргә лә тураһын ярып әйтеүҙән ҡурҡмаған. Беҙҙә лә бар ул ҡыйыулыҡ, тик уны күберәк көнкүреш кимәлендә генә ҡулланырға тура килә. Ҡайһы саҡта был ҡыйыулыҡ ҡыҙыулыҡҡа ла алып килә. Мәҫәлән... Бер саҡ улым менән ҡунаҡта булдыҡ та, Галле урамы буйлап башҡортса һөйләшә-һөйләшә ҡайтып барабыҙ. Йәйлилгә ул саҡта өс йәштәр тирәһе генә булғандыр. Беҙҙең арттан бер ҡаты менән ир кеше килә. Беҙгә төбәп тороп: "Килеп тулдылар бында ауылдан башҡорттар..." - тигәнерәк һүҙ ысҡындырҙы былар. Ҡыш ине. Йәлилде ситкә этәрҙем дә, ир кешене иңбашым аша көрткә ташлап, өҫтөнә менеп ултырҙым. Чечен булып сыҡты был, "Хәҙер бысаҡты сығарам, үлтерәм", тип ҡысҡыра. "Һин кемдең

**Азамат:** Атай беҙгә бер ваҡытта ла тауыш күтәрмәне. Ҡаты ғына итеп бер әйтеп ҡуя ине, әлбиттә. Салауат ағайым төрлө этлеккә оҫта ине. Уға мин дә ҡушылып китәм. Ләкин яҙаһы ағайыма түгел, минә эләгә. Берәй эш боҙғаныбыҙҙы белеп ҡалһа, атайым кем ғәйепле икәнен тикшереп-нитеп тормай, мөйөшкә мине баҫтыра ла ҡуя. Беҙҙең ғаиләлә "Быны мин эшләмәнем", тип аҡланып тороу йә алдашыу ғәҙәте юҡ ине. Үҙем ағайым өсөн яза үтәп торам, үҙем илайым, "Бына мин үлһәм, минең нисек ғәҙел булғанымды аңларһығыҙ, үкенерһегеҙ әле", тип уйлаған булам эстән генә.

Атайымды гел өҫтәл артында яҙышып ултырған килеш күрә инек беҙ. Уның бушты-бушҡа ауҙарып диванда ятҡанын күргәнем булманы, ятһа ла, ҡулында йә гәзит, йә журнал, йә китап булыр, янында ҡәләмдәре аунап ятыр ине. Беҙҙең өй китапхананыһындағы китаптарҙың барыһы ла төҫлө ҡәләмдәр, ручкалар менән һыҙыланып бөткән. Әле яныраҡ Толстойҙың көндәлектәрен ачам, бер ҡағыҙ бите килеп сыҡты. Унда атайҙың ҡулдары менән: "Шағир үҙенең тормошонан иң яҡшы нәмәләрҙе ала ла, үҙенең әҫәрҙәренә һала. Шуға ла уның әҫәрҙәре матур, ә тормошо насар була",- тип яҙылған. Ысынлап та, беҙгә атай йылыһы бик етмәгәндер ҙә инде. Атай был донъянан киткәндә туғыҙынсы класта уҡый инем. Хатта бер ултырып, атай һәм ул булып һөйләшмәгәнбеҙ ҙә, тиғән үкенеү ҡуйы тәмәке төтөнө таралыр ине, сөнки атай күп тарта торғайны. Ул үлгәс тә мин оҙаҡ ҡына тәмәке төтөнөндә атайҙың еҫен тоя торғайным.

Атайым яҙышып ултырған саҡта уның тубығында ултырғанымды хәтерләйем, күрәһең, был мин бөтөнләй бәләкәс саҡта булғандыр. Аңлаймыммы, аңламаймыммы, атай өсөн мөһим булмағандыр, ул минә Есенин, Пушкин шиғырҙарының русса вариантын, шунан үҙенең тәржемәһен ҡысҡырып уҡый ине. Был ижади кухняның эсендә булыу тойғоһо минең күңелемә шул тиклем һеңеп ҡалған һәм мин ҡайһы бер шиғырҙарҙы ятлап алып, һөйләп тә йөрөй инем. Атай беҙҙең менән башҡортса ғына һөйләште. Башҡортса һүҙҙәрҙән махсус һүҙлек төҙөп бирә лә, һөйләшкәндә минең был һүҙҙәрҙе ҡулланыуымды күҙәтеп торор ине. Тағы шул ныҡ хәтеремдә ҡалған: махсус музыка мәктәбендә уҡығанда атайым эргәһенә "Матбуғат йорто"на төшкә аш ашарға килә торғайным. Атайым ҡаймаҡ ашарға ярата торғайны. Ҡаймағын ашап бөтә лә, шул стаканға сәйен ҡоя, бик үҙенсәлекле эсемлек - ҡаймаҡлы сәй килеп сыға ине. Атайымдың шуны кинәнеп эскәне гел күҙ алдымда тора.

Шулай итеп, мин атайымдың мөхәббәте эсендә йөҙөп йәшәнем. Беҙ бәләкәй саҡта әсәйем ҡатыраҡ булды, бында тормошобоҙ ауырлығының да йоғонтоһо булғандыр, бәлки, минә шулай тойолған ғыналыр. Ҙурайғас, әсәйем менән бик ныҡ яҡынлаштыҡ. Дөрө-

***✓ Атайымдан өйрәнәһеләр, фәһем алыр нәмәләр күп. Ул тәбиғәте буйынса шундай ипле, һаҡсыл, теүәл кеше ине. Нәшер ителгән һәр китабының ҡулъяҙмаһы китап итеп тегелгән, яҙыуы ла ипле, матур. Ҡыҫҡаһы - эстет.***

# ХАЛҠЫ БАҺАЛАЙ - йәшәмәгән!

çөн әйткәндә, әсәй үҙенең һөйөүен, наҙын беҙ үҫкәс кенә бирә башланы.

**Азамат:** Атайым тураһында әллә ни күп нәмә лә һөйләй алмайым. Эйе, ул хөрмәтләүгә, ғорурланыуға лайыҡлы шағир кеше. Был йәһәттән Висенте Уйдоброның "Шағир - ул Алла; шағир ямғыр тураһында йырларға түгел, ә ошо ямғырҙы үҙенең шиғырҙарында яуҙыра алырға тейеш", тигән һүҙҙәре бар. Бына кем ул шағир! Ул - ижадсы. Ә беҙҙә, үкенескә күрә, шиғырҙар тотош декларациянан тора. 50-се йылдарҙағы, шулай уҡ 30-сы йылдарҙағы шиғырҙарҙы бөтөнләй уҡыуы мөмкин түгел. Мин Есенинды ла ҡабул итә алмайым. Бына япондарҙың шиғриәтен яратам. Һин телең осонда бал, лимон тәмен тояһың, йөрәгең дөпөлдәп тибә башлауын ишетәһең, йәғни, шиғыр кешегә ниндәйҙер мәғлүмәт еткерергә түгел, ә унын күңелендә тойғолар уятырға тейеш. Атайымдың бер нисә шиғырын мин ошолай ҡабул итәм. 19 йәшемдә уның, әйтәйек, "Ҡыш

**ғанлығын күптәрҙең уның эргәһенә һыйынып, таяныс табып йәшәүенән дә аңларға була. Ысынлап та, ул үҙенән бигерәк башҡаларҙы яҡлаған, ҡурсыған бит. Ғөмүмән, бөгөн дә, шағирҙы күреп белмәүселәр өсөн дә "Рәми мәктәбе"нән өйрәнәһеләр бик күп...**

**Азамат:** Ул дуҫтары тураһында "минең Динисем", "минең Сафуаным", "минең Рауилем", тип кенә һөйләй торғайны. Рауил Бикбаевты иң талантлыһы тип иҫәпләне, шуға ла ул уны гел яҡланы. Улар ҙа үҙ сиратында рәхмәтле була белде, атайҙың исемен онотторып тормау өсөн генә түгел, ә ғаиләбеҙҙе күтәреү өсөн дә әллә күпме ярҙам иттеләр.

Беләһегеҙме, ваҡытында үлә белергә лә кәрәк. Ғайса бәйғәмбәргә лә үҙенең тормош идеяһын, тормош фәлсәфәһен башҡаларға еткереү өсөн үлергә кәрәк булған бит. Атайым да шиғырҙарында үлем тураһында күп яҙған, тимәк, үҙ үлемен дә алдан тойған булһа кәрәк. Хатта ғүмеренең

ерлек төпләп ҡуйылған ҡулъяҙманы 2017 йылда китап итеп нәшер иттерҙем һәм минең атайым алдындағы бер бурысым үтәлде, тип уйланым. Әҙәбиәтселәр, тәржемәселәр өсөн бик кәрәкле һәм ҡиммәтле баҫма ул.

**Гөлнара:** Тәржемәләр тураһында һөйләшә башлағас, тағы шуны әйтәйем. "Минең антологиям" китабында баҫылған тәржемәләренең тәүге сығанаҡтарын эҙләп, әсәйем менән китапханаларҙа ла күп ултырырға тура килде. Шунда атайымдың ниндәй нескә тәржемәсе булыуын күрҙем дә инде.

**Азамат:** Ысынлап та, атайымдан өйрәнәһеләр, фәһем алыр нәмәләр күп. Ул тәбиғәте буйынса шундай ипле, һаҡсыл, теүәл кеше ине. Нәшер ителгән һәр китабының ҡулъяҙмаһы китап итеп тегелгән, яҙыуы ла ипле, матур. Ҡыҫҡаһы - эстет. Әгәр ҙә мөмкинлеге булһа, ул бик фырт кеше булыр ине, тип уйлайым.

**▸ Рәми ағай күберәк киләсәк өсөн ижад иткән бит. Күп**

булыр ине. 50-60-сы йылдарҙа атайым Иван Франко тигән яҙыусының әҫәрҙәрен тәржемә иткән, бергә туплағанда, һәлмәк кенә китап килеп сығасаҡ. Быларҙан тыш, атайҙың китапханаһында башҡорт эпостары яҙылған тотош папкалар һаҡлана. Бала саҡ көндәлектәрен китап итеп баҫтырып таратыу "Рәми мәктәбе"нең тос әсбаптарын тәшкил итер ине. Ғөмүмән, шундай хыялым бар: атайҙың архивын электрон версияға күсереп, бөтөн донъяға күрһәтергә ине.

**Гөлнара:** Әсәйебеҙ ҙә атайҙың архивы өҫтөндә күпмелер ваҡыт эшләп өлгөрҙө. Унын бала саҡ көндәлектәрен тулыһынса китап итеп баҫтырып сығарыу тураһында хыялланғайны, был йәһәттән эш башланғайны ла. Тик... Атайҙың үлемен бик ауыр кисерҙе һәм ошо хәлдән оҙаҡ сыға алмай йөрөнө шул әсәйебеҙ.

Ҡасандыр әсәй Эдвард Радзинскийҙан шундай фекер күсереп алғайны, быны русса әйтһәк, дөрөҫөрәк яңғырар кеүек: "Поэту должно повести не с женой, а вдовой". Әсәй атай өсөн шундай тол ҡатын булды һәм үҙе үлгәндән һуң да Рәми һүҙенең шул тиклем көслө яңғырауында уның роле лә бар, тип уйлайым. Башҡорт йәмәғәтселеге алдына сығып, илай-илай атайым тураһындағы иҫтәлектәре менән уртаҡлашыуы, башҡортса уның шиғырҙарын һөйләүе әле лә күҙ алдымда. Әсәйем ижади шәхес ине, ул үтә көслө ҡатын ине. Әсәй тоғролоҡ, оло мөхәббәт символы ла. Әйткәндәй, уны, рус ҡатынын, башҡорт йәмәғәтселеге яратып, үҙ итеп ҡабул итә ине. Әсәйем үҙен ысын башҡорт ҡатыны итеп тойоп йәшәне. Ейән-ейәнсәрҙәре менән мотлаҡ башҡорт телендә аралашырға тырышты, "Башҡортса һөйләшегеҙ, һеҙ бит Рәми балалары", тип әйтеп кенә тора ине.

**▸ Рәми ағайҙы күреп белгән дуҫтары, замандаштары күңелендә шағир яҙмышы тураһындағы үкенес барыбер ҙә үҙен белгертә. Ә һеҙҙә бармы ул үкенес, яҙмышҡа үпкәләү? Ғөмүмән, Рәми Ғариповтың улы йә ҡыҙы булыу ауырмы, еңелме?**

**Азамат:** Беҙ бик ауыр йәшәнек, тип һөйләй ине әсәйебеҙ. Әммә беҙ, балалар, уны һиҙмәнек тә. Бала саҡта нимә кәрәк инде? Ҡышын берәй кеда кейеп алаһың да, йүгереп тик йөрөйһөң. Атайымдың: "Был ниндәй оятһыҙ, үтеп сығып булмаған етешһеҙ донъя һуң ул..." - тип асырғаныуын бер аҙ иҫләйем. Көндәлектәрендә лә был турала яҙылған.

Атай үлгәс, Дим буйында әсәйгә баҡса өсөн ер бирҙеләр. Мин унда бәләкәй генә йорт төҙөп ҡуйҙым. Их, ошо йортҡа мейес сығарып ҡуйып, шунда атайҙы йәшәтһәң ине, тигән хыял миндә гел булды. Мин уны тәрбиәләр, ҡарар инем, ә ул үҙенә оҡшаған эше менән шөғөлләнер ине, тим. Юғиһә, балыҡты һыуҙан тартып алып, үҙенең тәбиғи мөхитенән айырғандар ҙа, ул, әйҙә, боҙға һуҡҡыланған да һуҡҡыланған. Беҙ бит таланттарҙы һаҡлай белмәйбеҙ. Әгәр ҙә уның тормошонда ауырлыҡтар, эҙәрләүҙәр, мәхрүмлектәр, был тиклем һынауҙар булмаһа, башҡалар һымаҡ шыма ғына йәшәһә, атай ниндәй булыр ине икән, тип тә уйлайым ҡайһы саҡта. Юҡ, ул барыбер кемгәлер яраҡлашып йәшәй алмаҫ ине, ә ундайҙар мотлаҡ һәләкәткә дусар була. Ярһыу тау йылғаһында тулҡындар һуғыуҙан шымарып бөткән таштар була, тулҡындарға ҡаршы торған, мәғрүр ҡаяға әүерелгән таштар ҙа була. Атайым беҙҙең күңелдә, халыҡ күңелендә ана шул мәғрүр ҡая һымаҡ. Йылға, тигәс, атайымдың, яҡшылыҡ эшлә лә, таш аҫтына һал, балыҡ белер, балыҡ белмәһә, халыҡ белер, тип ҡабатлағаны иҫкә төшә. Эйе, уның эшләгән эштәрен халыҡ белә. Теле асылыр-асылмаҫтан балалар уның "Туған тел" шиғырын һөйләй, йәштәр теленән дә төшмәй уның шиғырҙары. Тимәк, атайым юҡҡа ғына йәшәмәгән.

**Гөлнара:** Әлеге 90 йәшлек яҙыусыларға ҡарайым да, минең атайым да ошо йәшкә етә ала ине бит, тигән үкенесле тойғолар кисерәм мин дә. Беҙ атайыбыҙҙың кем икәнен белһәк тә, бер ҡасан да уның исемен ниндәйҙер маҡсатта ҡулланып йөрөмәнек. Беҙ үҙебеҙҙе үҙебеҙ булдырҙыҡ, хатта эшләгән урынымда 30 йәшкә тиклем минең Рәми Ғариповтың ҡыҙы икәнемде белмәнеләр.

**Азамат:** Рәми Ғариповтың улы булыу ауырмы, еңелме, тигән һорауҙы йыш бирәләр. Еңел түгел, киреһенсә, оло яуаплылыҡ, тиер инем мин. Ни өсөн Константин Райкин, Андрей Тарковскийҙар кеүек, һин дә атайыңдың юлын дауам итмәнең, тиеүселәргә минең яуабым юҡ. Ундай амбициям юҡ, һөмһөҙ түгелмен, баш аша йөрөй белмәйем, талантымды тыныс баһалайым. Рәми Ғариповтың улы булған өсөн генә мине юғарыраҡҡа күтәреүҙәренә мин бер ҡасан да риза булмаҫ инем. Баһалауҙар һинең үҙ һәләттәрең менән тап килергә тейеш - был фекеремдән кире ҡайтасағым юҡ...

әкиәте"н уҡыһам, ваҡыт үтеү менән "Диңгеҙ ҡыҙы"ндағы тыуған ил-әсәнең һүҙҙәре йәки ҡобайыр жанрында яҙылған әҫәрҙәре күңелемә үтеп инеп тетрәндерҙе.

**▸ Башҡорт әҙәбиәте донъяһында "Рәми мәктәбе" тигән төшөнсә бар. Рәми ағайҙың ни тиклем көслө шәхес бул-**

һуңғы мәлендә башҡортсаға тәржемә иткән Омар Хайямдың һуңғы робағийы ла үлем тураһында: "За что же ты убил меня, владыка вечный..."

**Гөлнара:** Атайҙың Омар Хайям тәржемәләрен үҙ ҡулы менән яҙып, тегеп, китап итеп төпләп ҡуйған ҡулъяҙмаһы һаҡлана ине архивында. Был китаптағы ошо һуңғы робағи ул үлер алдынан ғына унда яҙып ҡуйылған...

**Азамат:** Гөлнара әйткән ошо үҙе тарафынан тулыһынса ти-

**әҫәрҙәрен тере сағында бер ҡайҙа ла баҫтыра алмаған, әммә быны менән ижадтан һүрелмәгән, яҙған да яҙған. Атайығыҙҙың архивында әлегә һеҙҙең ҡул теймәгән ҡулъяҙмалар тағы бармы?**

**Азамат:** Бар, әлбиттә. Башҡортостандың халыҡ шағиры булараҡ, уның әҫәрҙәренең тулы йыйынтығын сығарғанда шәп булыр ине, ҡул теймәгән ҡулъяҙмаларын да шунда өҫтәргә мөмкин





**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Университетҡа ғүмерем буйы рәхмәтлемен, сөнки унда беҙгә, башҡорт балаларына, белем биреүҙән тыш, милли рух, милли тойғо уята, үҙебеҙҙең кемлегебеҙҙе, ниндәй милләт балаһы булыуыбыҙҙы таныта белделәр.*



МИНЕҢ РӘМИ



**Рәми ағай Ғарипов менән тәүге танышыуым 1973 йылдамы, 1974-тәме, асыҡ ҡына хәтерләмәйем, Башҡорт дәүләт университетының "Шоңҡар" әҙәби түңәрәге үткәргән шиғриәт кисәһендә булды. Сәхнәлә ул "Туған тел" шиғырын уҡығайны. Ул әҫәрҙе күптәрҙең тәүгә ишетеүе булһа ла, ошондай шиғыр барлығын белә инек инде, өлкән курстағылар был хаҡта һөйләп өлгөргәйне. Кисәлә Рәми ағай тап шул тамаша залында ултырған студенттарҙың һорауы буйынса һөйләп ишеттергәйне ул шиғырҙы.**

# УНЫҢ ҺАБАҠТАРЫ ОНОТОЛМАЙ



*"Шоңҡар"ҙар ойошторған ошондай кисәләрҙең береһендә Рәми Ғарипов "Туған тел" шиғырын уҡыны.*

Шағирҙы тыңлағанда ниҙәр кисергәнемде һөйләп аңлатыу мөмкин түгел. Ғорурланыуҙан, һоҡланыуҙан тәндәр семерҙәне, күҙ йәштәремә быуылыҡтым. Ғорурлығым, берҙән, ошондай бөйөк шиғыр яҙған бөйөк Шағирҙы үҙ күҙҙәрем менән күреүҙән, үҙ ҡолағым менән ишетеүҙән булһа, икенсенән, ул юлдарҙың минә, минең булмышыма, асылыма, яҙмышыма ҡағылыуынан да ине. Һүҙемдән ситләшеп шуны әйтәм: университетҡа ғүмерем буйы рәхмәтлемен, сөнки унда беҙгә, башҡорт балаларына, белем биреүҙән тыш, милли рух, милли тойғо уята, үҙебеҙҙең кемлегебеҙҙе, ниндәй милләт балаһы булыуыбыҙҙы таныта, тарихи хәҡиҡәткә күҙҙәребеҙҙе аса белделәр. Шуға ла беҙ милләт тураһындағы һүҙҙе, халҡыбыҙҙың йыр-моңдарын шундай ныҡ ҙур йәрәхәтле тәрән тойғо менән йөрәгебеҙҙән иң тәрән төпкөлөнә ҡабул итергә өйрәндек...

Кисәнән һуң да беҙ, "Шоңҡар" ағзалары, Рәми ағайҙың сығышы хаҡында һөйләшеүҙе дауам иттек. Кемдәрҙер уның шиғырының айырым-айырым юлдарын иҫкә төшөрҙө, уны ятлап алырға тырышты. Хәйер, шиғырҙы "ағзалап" йыйыусылар бер беҙ генә булмағанбыҙ. Өлкән курста уҡыусылар ошондай бер кисәләрҙең береһенән һуң КГБ вәкиленең дә Рәми ағай шиғыры менән ҡыҙыҡһыныуы, уны "ағзалап" йыйыуы тураһында һөйләгәйне. Был хәбәр беҙҙең күҙ алдында шағирҙың һаһын тағы ла нығыраҡ күтәреп, уны тағы ла бөйөгөрәк шәхескә әйләндергәйне...

Рәми ағай Ғариповҡа шиғыр кисәләрендә шулай ситтән генә һоҡланып, йотлоғоп шиғырҙарын тыңлап йөрөй торғас, 4-се курстың аҙағына ла етелде. 1976 йылдың 23 апрелендә беҙҙе, әҙәби тәнҡит менән шөғөлләнеүсе бер төркөм студенттарҙы, Яҙыусылар союзына әҙәби тәнҡит секцияһына саҡырҙылар. Унда минең, Марат Әбүзәровтың һәм Салауат Рәсүлевтың тәүге тәнҡит материалдарын тикшереүгә ҡуйғайнылар. Күренекле тәнҡитсе-әҙәбиәтселәр Ғайса Хөсәйенов, Ким Әхмәтйәнов, Әнүр Вахитов, Вафа Әхмәҙиев, Роберт Байымов беҙҙең яҙғандарға анализ яһаны һәм башлыса маҡтау һүҙҙәре әйтте. Маҡталыу һәйбәт булһа ла, күберәк етешһеҙлектәребеҙ хаҡында ла ишетке килгәйне. Шуға ла мин үҙем ағайҙарҙың сығышынан бик үк ҡәнәғәт ҡалманым. Ҡәнәғәтһеҙлегемде белдерергә теләпме, әллә үҙемдең тәнҡит материалындағы дәлилдәрҙе тәрәнәйтергә, нығытырға ниәтләнгәндәнме, ошо оло әҙиптәр алдында сығыш яһарға батырсылыҡ иттем. Башҡорт сәхнәһендә барған спектаклдәрҙә эскелек күренештәренең күбәйеүен, эскесенән көлкөлө образ тыуҙырып, ошо образдың тамашасының һөйөүен уятырлыҡ итеп ижад ителеүен тәнҡитләнем...

Әлбиттә, студент кешенең тәнҡите әллә ни сәпкә лә теймәгәндер. Ә шулай ҙа... Минең сығышҡа секция ултырышында ҡатнашҡан, һүҙһеҙ генә тыңлап ултырған Рәми ағай иғтибар иткән булып сыҡты. Ултырыштан һуң ул мине саҡырып алды ла: "Әйҙә, һылыу, әлеге сығышыңды беҙгә, "Башҡоростан ҡыҙы" журналына яҙып алып кил", - тине. Башта түбәм күккә тейгәйне, әлбиттә. Дөйөм ятаҡҡа ҡанатланып ҡайтып, бағыу мәҡәләне яҙырға ултырғас ҡына үҙемә ниндәй ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелгәне, уны үтәп сығыуы бик үк еңелдән булмаҫы башыма барып етте. Кеше үҙ һәләттәрен эштә һынап ҡарағанда ғына белә. Быуа ошондай оло һынау алдында ҡалдым мин. Ул мәҡәләне яҙыр өсөн әллә күпме йоҡоһоҙ төндәр үткәрҙем, әллә күпме ҡағыҙ биттәре сыймаҡланым. Яҙҙым да һыҙҙым, һыҙҙым да тағы яҙҙым. Мәҡәләмде бер ипкә килтергәс, тулҡынланып, Рәми ағай алдында һынау торорға киттем. Рәми ағай яҙғандарымды ҡарап сығырға ниәтләп, алдына һалды ла, килһе яҙыласаҡ мәҡәләм тураһында һүҙ ҡуҙғатты. Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Зәйтүнә Камалетдинованың ижади портретын яҙып алып килергә ҡушты...

Ҡыҫҡаһы, минең баяғы тәнҡит мәҡәләм донъя күрмәне. "Башҡортостан ҡыҙы" журналында баш мөхәррир булып эшләгән Рәҡиә апай Рөстәмоваға оҡшаманы ул. "Тешең сыҡмаған бит әле, ҡыҙыҡай, бер аҙ йомшарта төш мәҡәләңдәге тәнҡитте..." - тигәйне ул минә. Мин башҡаса ул мәҡәләгә тотонманым. Фәнни тел менән яҙылған курс эшенән әтмәләгән мәҡәлә камил да булмағандыр, шуны үҙем дә аңлағанмындыр, шуға ныҡышмағанмындыр. Ә бына икенсе, Зәйтүнә Камалетдинова апай тураһындағы мәҡәләмде Рәми ағай ҙа, баш мөхәррир ҙә оҡшатты һәм шунда уҡ журналға бирҙеләр. Ошо мәҡәлә минә юл башы фатихаһы булды шикелле.

Күп тә үтмәй, Рәми ағай өгөтләүе менән, Рәҡиә Сөләймән ҡыҙы мине "Башҡортостан ҡыҙы" журналына эшкә саҡырҙы. "Эшләй алырмыны икән, диплом яҙырға ла кәрәк", - тип һөйләнгәнемде ишетергә лә теләмәне Рәҡиә Сөләймән ҡыҙы. Деканатҡа үҙе шылтыратып, ул саҡтағы деканыбыҙ Марат Вәли улы Зәйнуллин менән һөйләште лә, мәсьәләне хәл итеп тә ҡуйҙы (Тәүәккәллек тә, дыуамаллыҡ та, эшлеклелек тә, талапсанлыҡ та етерлек ине шул был ҡатында, тик кеше күңелен аямауы, тупаҫлығы менән үҙенең ошо шәп сифаттарын тоноҡландырып ҡуя ине ҡайһы саҡта).

Шулай итеп, мин 5-се курс башында уҡ редакцияла эшкә тотоноп киткәйнем. Рәми ағай менән бер бүлмәгә ултыртып, ул алып барған әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеге эшенә егеп ҡуйҙылар. Рәми ағай алдыма хаттар туплан-ған ҡалын ғына бер папка килтереп һалды: "Бына, яҡташың, Әнисә Таһирова апайыңдан ҡалған хаттар, шуларҙың арыуҙарын баҫырға әҙерлә, баҫырлыҡ түгелдәренең авторҙарына хат яҙ..." - тине ул. Мин тырышып, башымды ла күтәрмәй, шул хаттарҙы аҡтарырға тотондом. Ҡайһыларын материал итеп әҙерләйем, ҡайһыларына хат яҙам да, яҙғандарымды тикшерер өсөн Рәми ағайҙың өҫтәленә һалам. Ул әҙерләгән мәҡәләләргә тел тейҙермәй, ләкин авторҙарға яҙған хаттарҙы кире ҡайтара. "Йылыраҡ итеп яҙ", - ти. Мин нисек кенә тырышһам да, ул хаттарҙы "йылыта" алмайым, кәрәкле һүҙҙәр таба алмай ҡаңғырам. Бер көн Рәми ағай юҡ саҡта уның журнал уҡыусыларға яҙған хаттарын алып уҡырға булдым. Уҡый башланым да, уларҙан айырыла алмай ҡапландым. Бер бәләкәй генә, бөтөнләй камил булмаған шиғыр йә нәҫер яҙыусыға, йә "Серҙәш" рубрикаһында эс серҙәрен бүлешеүсегә "һыу буйындай" яуап яҙған Рәми ағай. Шиғриәт теорияһын, нисек шиғыр яҙырға кәрәклекте өйрәткән, йә тормош, һөйөү хаҡында үҙе аңлағандарҙы, үҙе белгәндәрҙе бәйән иткән, кәңәштәр биргән (Рәми ағай үлгәс, мин ул хаттарҙы барыһын да архивтан йыйып алып, Рауил ағай Бикбаевҡа тапшырғайным).

Рәми ағайҙың "Мөхәббәт бирәү генә буламы?" тип хат яҙған ҡыҙыҡайға яуабынан юлдарҙы үҙемдең көндәлегемә яҙып ҡуйғанмын икән: "Кеше тойғолары ҡаршылыҡлы. Ләкин кешенең йөрәге бирәү икән, уның тойғолары, ниндәй генә булмаһын, барыбер тәүге хистәренең дауамы бит ул. Һәр яңы кисереш элеккеләренә сылбыр һымаҡ ялғанған була. Тик тәүге кисереш, үтә идеаль, үтә саф, сабыйҙарса, тәжрибәһеҙ, ҡыҫҡаһы, тәүге булған өсөн дә иң көслөһө кеүек тойола. Тойола ғына, ә иң көслөһө тәүге түгел. Тормош сикһеҙ бай, ҡатмарлы булған кеүек, кешенең тормошҡа мөнәсәбәте лә, мөхәббәте лә, уй-тойғолары ла байый, ҡатмарлана, тәрәнәйә баралыр ул. Ә тормошта ниндәй генә тетрәнеүҙәр булмаҫҡа мөмкин. Тәүге мөхәббәт тигәнең ғазаплы яҙмышың алдында һағынып, йылмайып ҡына иҫкә алаҫаҡ, йәшенле дауыл алдында бер йәйғор ғына булып ҡалырға мөмкин бит". Был юлдарҙы көндәлегемә яҙып ҡуйыу сәбәбе шул булғандыр: мөхәббәт берәү генә була тип һанаған мин хыялый ҡыҙ өсөн дә был юлдар яңылыҡ булып тойолған, хатта был фекер ҡабул ителмәгән. Хәҙер генә ул ҡабул ителә...

Ошо хаттарҙы уҡығас, миндә уңайһыҙланыу, оялыу, үҙемдең һәләтлектәремә шикләнеү барлыҡҡа килгәйне. Күрәһең, ул саҡта мин "тәжрибә" тигән нәмәнең ниндәй ҙур төшөнсә булыуын аңламаған булғанмындыр. Уны мин хәҙер, үҙ профессиям өлкәһендәге тәжрибәле кеше булараҡ аңлайым. Минең авторҙарға Рәми ағай кеүек итеп яҙыр һүҙем дә, тәжрибәм дә булмаған. Ә шулай ҙа булдыра алғанса тырышырға кәрәк икәнде аңғартҡайны Рәми ағай, хатта талап иткәйне. Бына шунан һуң мин хатты нисек яҙырға кәрәклекте аңлағайным.

...Бер саҡ Рәми ағай, Ҡыйғы районына шикелле, командировкаға барып ҡайтты ла, үҙенең унан алып ҡайтҡан мәҡәләһенә нисек материал туплауы, нисек яҙылыуы хаҡында һөйләп алып китте. "Бер ауылға барып индек, ауыл осондағы бер йорт алдында, эскәмйәлә, ике әбей ултыра. Улар янына туҡтап, донъя хәлдәре тураһында, колхоз эше, етәксеһе хаҡында һораша башланыҡ. Мәғлүмәт ошо әбейҙәрҙең һөйләүенән башланды. Шул арала ҡуҡтә торналар ҡысҡырғаны ишетелде, йылы яҡҡа юл алғандар икән. Әбейҙәр менән ошо ҡоштар, тәбиғәт, заман хаҡында һөйләшә башланыҡ. Былар барыһы ла минә мәҡәлә яҙғанда ярҙам итте. Бына шулай аяҡ аҫтындағын күрмәй, күктән турғай тоторға йөрөгәндәй йөрөрғә ярамай журналист кешегә, уның һәр барыһын да күрергә тейеш, ә етәкселәрҙең ауыҙына төбәлеп, уларҙың һәр һүҙен йотоп, шуны ҡағыҙға күсереп ултырырға ғына түгел..." Бына был һүҙҙәр ҙә һабаҡ булды минә. Мин уларҙы әле лә хәтерләйем.

...Рәми ағай журналист булырға ғына түгел, тормош һабаҡтары ла бирҙе, аҡты ҡаранан айырырға, кешеләрҙең ҡәҙерен белергә, изгелек ҡылырға ла өйрәтте. Аҙ, бик аҙ ғына бергә ултырып эшләргә яҙҙы, ләкин ошо ике ай самаһы ваҡытта күпме һабаҡ алдым мин был бөйөк Шағирҙан. Һәр даим осраҡта әле булһа иҫкә төшә Рәми ағай биргән һабаҡтар. Ул бөйөк Шағир ғына түгел, ул журналист булырға йыйынған йәш кешегә ошо һөнәрҙең иң тос һабаҡтарын күңелгә һеңдереүсе; ул ихласлыҡ, тура һүҙлелек, ярҙамсыллыҡ, вайымлылыҡ, рухилыҡ, илһөйәрлек, телһөйәрлек өлгөһө лә булды минең өсөн, минең замандағы һәр ижади йәш кеше өсөн...

Әйткәндәй, Рәми ағай хаҡында һөйләгәндә гел генә: "Рәми Ғарипов ауыр яҙмышлы кеше, ул тормошта ҡағылып-һуғылып йәшәгән", - тигәнде әйтмәй ҡалмайҙар. Улайға китһә, кемдең тормош юлы таҡыр ғына булған да, кем үҙенең хыял-ниәттәренә еңел генә өлгәшкән һуң? Рәми ағай ижад донъяһында юғары маҡсаттар, тыуған халҡы мәнфәғәтендә изге хыялдар ҡороп йәшәгән кеше. Ошондай юғарылыҡҡа өлгәшеү юлы еңел генә яуланмай, әлбиттә. Ә ул бит яулаған ул юғарылыҡты! Йә, әйтегеҙ, кемдең шиғыры һәр баланың, һәр йәш кешенең, һәр өлкән кешенең телендә һуң? Сабыйҙарҙың теле Рәми ағайҙың "Туған тел" шиғыры менән асыла икән, ул ошо шиғыры өсөн генә лә бөйөк Шағир исеменә лайыҡ бит! Бәхетле, бик бәхетле яҙмышлы кеше ул Рәми ағай! Бына әле Рәми Ғариповтың тыуыуына 90 йыл тулыуҙы киң билдәләйбеҙ. Һәр ғаиләлә, һәр ауылда, һәр ҡалала ошо дата унайынан Рәми һүҙе яңғырай. Яңғыраһын! Рәми йылы булһын 2022 йыл. Ошондай шәхестәребеҙҙең телһөйәрлек, милли рух, кешелеклелек, ихласлыҡ өлгөһө килһе быуындарға ла көсһен. Иншаллаһ!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

✓ *Рәми Ғарипов исемен әйтеү менән бер кемгә лә оҡшамаған, сағыштырғыһыҙ һәм ҡабатланмаҫ шағир һәм шәхес күҙ алдына килеп баҫа. Уға шағирлыҡ әсә һөтө менән ингән.*

ИНТЕРНЕТТАН



# МИЛЛИОН БАКТЕРИЯ...

■ Кешене төрлө бактериялар уратып алған. Уларҙың һаны миллионға етә, ти белгестәр. Әле беренсе саң һурҙырғыс уйлап табылғанға тиклем үк, 18-се быуатта шотланд табибы Джон Хантер: "Саң дарыға ҡарағанда күберәк кешене һәләк итте", - тип белдерә. Ул ваҡытта табипҡа ышаныусылар күп булмаһа ла, бөгөн быны дөрөҫләгән белгестәр дәлилләгән инде. "Беҙ микробтар араһында йәшәйбеҙ һәм уларҙың нигеҙен үҙебеҙҙең микроорганизмдар алып тора, - ти тикшеренеүҙәр авторы, Йель университетының экология кафедраһы доценты Джордан Печиа. - Барыбыҙ ҙа йорттарыбыҙҙы һирәк йыйыштырабыҙ, әммә унда әүҙем тормош алып барабыҙ, мәҫәлән, спорт менән шөғөлләнәбеҙ, шуға ла иҙәнгә йыйылған саң өҫкә күтәрелә һәм беҙ бактерияларға "байыған" һауаны һулайбыҙ". Шулай уҡ кеше үҙе әйләнә-тирәһенә һәр сәғәт һайын 37 миллион бактерия "өҫтәп" тора, ти тикшеренеүселәр. Бүлмәләге һауаны тикшереп ҡарағандан һуң, унда йышыраҡ осраған 15 төргә яҡын бактерияларҙың дүртәүһе кеше тиреһендә осраған бактериялар төрөнә ҡараған. Шуға ла саңды йышыраҡ һөртөргә һәм бүлмәне елләтергә кәрәк.

■ Сәләмәт булғығыҙ килһә, үҙегеҙҙе башҡалар менән сағыштырмағыҙ һәм көнләшмәгеҙ, тип белдерә Канаданың Конкордия университеты ғалимдары. Улар кешенең иммунитеты һәм гормональ фоны уның социаль торошо менән бәйле булыуын асыҡлаған. Эксперимент күрһәтеүенсә, үҙен уңышлы кешеләр менән сағыштырып, файҙаның үҙ иҫәбенә булмауына зарланырға яратыусыларҙың иммунитеты ла түбән булған, гормондар дисбалансы ла күҙәтелгән. Дуҫтары һәм хеҙмәттәштәре араһында үҙен кәрәкле кеше тип тойоусыларҙың кәйефе лә яҡшы була, улар төрлө вирустарға ла бирешеп бармай, имеш.

■ Күптән түгел генә Америка ғалимдары шәкәрҙең зыяны тураһында йәмәғәтселеккә еткереп, уны хатта алкоголь һәм тәмәкегә тиңләп ҡуйғайны. Бәлки ошо мөрәжәғәт һөҙөмтәһелер - шәкәр ҡулланыусылар кәмей бара, ти табиптар. Мәҫәлән, һорау алыуҙарҙа ҡатнашҡан рәсәйҙәрҙең 27 проценты "аҡ үлем"де үҙенең рационынан алып ташлаған. "Шәкәр ҡулланыуҙы кәметеү өсөн һеҙ нимә эшләйһегеҙ?" тигән һорауға күптәр: "Татлы һәм составында шәкәр күп булған аҙыҡтарҙы ашауҙы ҡыҫҡарттым", - тип яуап бирһә, рәсәйҙәрҙең 27 проценты шәкәр-рафинад, татлы газлы эсемлектәр һәм кәнфит ҡулланмай. Уларҙың 13 проценты татлы ризыҡты яратмай, шуға ла улар өсөн бындай проблема бөтөнләй юҡ. Ә 29,2 процент яуап биреүсе шәкәр ашауҙы ҡыҫҡартыу өсөн бер нәмә лә эшләмәй, сөнки "бының бер ниндәй мәғәнәһен дә күрмәй". Ғалимдар бигерәк тә иртәнге сәйгә шәкәр һалмаҫҡа кәңәш итә. Татлы эсемлек ҡандағы шәкәрҙең күләмен күтәреп кенә ҡалмай. Уянғас та тәм-том менән "һыйланған" организмға ғәҙәттәгенән артығыраҡ калория кәрәк буласаҡ.

■ Ҡайһы бер гүзәл заттарҙың ДНК-һында йәш көйөнсә һаҡланыу мөмкинлеге биргән гендар бар. Тап ошо гендар уларға гел йәш күренергә генә түгел, ә 45 йәштән һуң да бала табырға ярҙам итә. Иерусалимдың "Адаса Эйн-Керем" дауаханаһы медиктары һәм Йәһүд университеты тикшеренеү үткәргәндә 45 йәштән һуң ауырға ҡалыуға өлгәшкән ҡатын-ҡыҙҙарҙың ДНК-һын 30 йәшкә тиклем бала тапҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы менән сағыштырып ҡараған. Баҡтиһәң, был ике төркөмдәге ҡатындар 60 ген менән айырыла. Был гендарҙың етәүһе оҙон ғүмерле булыу менән бәйле һәм уларҙың барыһы ла оло йәштәге әсәйҙәрҙә осраған. Шул иҫәптән, был ҡатындарҙа оҙағыраҡ йәш көйөнсә һаҡланырға булышлыҡ итеүсе гендар ҙа булған. Лаборатор йәнлектәрҙә үткәрелгән тикшеренеүҙәр ғалимдарҙың фекерен раҫлаған.

МИНЕҢ РӘМИ



# ХӘТИРӘЛӘРҘӘН ӨҘӨКТӘР

## МАТУРЛЫҠТА - УЙСАНЛЫҠ

...Рәми Ғарипов йөрәгенең ярылыуы беҙҙең бик күптәребеҙҙең йөрәген ярып үтте. Был хәл үтә үкенесле һәм ваҡытһыҙ ине.

Дөрөҫ, бер үлем дә үкенесһеҙ һәм ваҡытлы булмай, ләкин Рәми Ғариповтың донъянан китеүенә, нисектер, беҙҙең йөрәк әрнеүҙәре лә килеп өҫтәлә һәм был әрнеүҙәр шағирҙың шиғырҙарындағы йөрәк әрнетеүҙәренә барып тоташа.

Шуныһы асыҡ: шағирҙың ижады тотош әрнеүҙәрҙән генә тормай, күңеленең төрлө саҡтары уның шиғырҙарында сағыла, ләкин шулай ҙа әрней белмәгән шағир - ысын шағир түгел, ул - йөрәкһеҙ шағир, ә булмаған йөрәктең ярылыуы ла мөмкин түгел.

Рәми Ғарипов исемен әйтеү менән бер кемгә лә оҡшамаған, сағыштырғыһыҙ һәм ҡабатланмаҫ шағир һәм шәхес күҙ алдына килеп баҫа. Уға шағирлыҡ әсә һөтө менән ингән. Тимәк, ул ысын мәғәнәһендәге шағир, ҙур талант эйәһе. Ул ғүмере буйы ана шул ҙур талантына, тәбиғәттең биргәненә таянып, ысын шағирҙарса, үҙ ғүмер законы, үҙ ҡағиҙәһе менән йәшәне. Бындай ғүмер юлын үтеү, әлбиттә, еңел түгел. Шуның өсөн дә уның шиғырҙарын, ундағы уйҙарын, кисерештәрен башҡалар менән (әгәр ҙә улар башҡаларҙа булһа әле) бутарға мөмкин түгел...

**Назар НӘЖМИ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

## МОҢ ҠАЛДЫРЫП КИТТЕ

...Рәмиҙең күп ҡыллы ҡылыҡтарын, аяҙлы-болотло уй-фиғелдәрен мин тамам белеп еткерә алманым, уның ҡатмарлы тәбиғәтенең бөтә нескәлектәре минең өсөн асылып бөтмәне (шиғырҙарынан тыш, әлбиттә). Уның өсөн шартлы нәмәләрҙән тамам азат ҡорҙаштар, быуындаштар, көнкүрештәш әшнәләр булыу кәрәк, дауларға, бәхәсләшергә, боҙолошорға, унан, һағынышып, дуҫлыҡ яңыртырға кәрәк. Беҙ тынысыраҡ, тигеҙерәк мөнәсәбәттә булдыҡ. Әммә мин уның төп асылын ярайһы ғына төҫмөрләйем.

Көнкүреш мәшәҡәттәренән ул азат уҡ булмаһа ла, шуларҙан өҫтөнөрәк торҙо, шикелле. Донъяларын һәр йәһәттән көйлө, теүәл алып барыусы, малдың хәләлен дә, харамын да өлгөр табыусы әҙәмдәр Рәми ишеләрҙе вайымһыҙға, булдыҡһыҙға сығара. Дөрөҫ, донъя көтөү йәһәтенән ул егәрлеләрҙән түгел ине. Шулай ҙа төрлө ерҙә хеҙмәт итеп йөрөгәндә лә, ҡуштандарға ҡуштан булып, өтәлән күндәмдәрҙән һаналманы, ахырыһы. Исеме ҡыҙыл таҡталарҙа балҡып торманы. Әммә ул эшлекһеҙ булманы, ифрат эшһөйәр, һөйгән эшен мөкиббән китеп, зауыҡланып, ярһып башҡарыр кеше ине. Үҙе йәшәгән йондоҙло йыһаны - әҙәбиәт, башҡарған мөҡәддәс хеҙмәте - шиғыр булды. Дәрүишерәк тәбиғәтле ине ул Рәми. Татарҙарҙың бөйөк Туфаны, йәғни Рәми Ғариповты, энекәшем тип яратып, юғары баһалаған Хәсән Туфан, балҡарҙарҙың бөйөк сабыйы Ҡайсын Кулиев ана шундай ойотҡонан, шундай тоҡомдан ине. Улар өсөн донъя - фани, шиғриәт - мәңгелек.

Уның утыҙ йылға яҡын ғүмере минең ҡаршымда тиерлек уҙҙы. Беҙҙе юлдаштар иткән юлдар ҙа, йырҙаштар иткән йырҙар ҙа, табындаштар иткән табындар ҙа булды. Ә хәтер уларҙы, юйылмаҫлыҡ итеп, берәм-берәм теркәй алмаған. Шуға күрә мин шағир тормошондағы төрлө ваҡиғаларҙы өҙөп-йолҡоп ҡына иҫкә төшөрөргә баҙнат итмәнем. Мин уның ғәзиз һынын, рухи йөҙөн, ут һәм йыр бөркөп торған йөрәген күҙ алдына килтерергә тырыштым. Ошо йөрәк еребеҙгә һәм халҡыбыҙға күпме нур, күпме моң ҡалдырып китте. Ижады уның васыятҡа әйләнде. Был инде - оло шағирҙарҙың ғына яҙмышы.

**Мостай КӘРИМ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**
**1990 йыл.**

## ТӨП ҠОРАЛЫ - ТЕЛ

...Ғүмеренең һуңғы йылдарында Рәми Ғарипов халыҡ төшөнсәһен уның бары бер факторына (иң мөһиме булһа ла) - телгә генә ҡайтарып ҡалдырған саҡтары ла булғыланы. Рәми Ғарипов ижады тураһында яҙыусы авторҙар был фактты күрмәмешкә һалыша, унан ҡасырға тырыша, әйтерһең, был шағир ижадында бөтөнләй булмаған! Ниңә унан ҡурҡырға? Тыуған телде данлау, уға ҡарата шиғыр яҙыу, үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү ярамаған яҙыҡ эшме ни? Тел осонда торған шағирҙарҙы атап сығам: Ломоносов, Тургенев, Шевченко, Туҡай, Маяковский, йә булмаһа, Ғамзатовты алығыҙ. Улар туған телдәренә ҡарата ниндәй һоҡланғыс юлдар бағышланы. Бит милләт төшөнсәһен билдәләгәндә иң мөһим компонент - тел. Ул, әйтер инем, географик төшөнсәнән киңерәк. Тарас Шевченко Көньяҡ Уралда ла, ҡасаҡтар далаларында ла украинса яҙҙы, Мицкевич Рәсәйҙә лә полякса ижад итте. Ярты ғүмерен французлар араһында



**✓ Уй-фекерҙәрен, күңел сыуалыштарын, асыштарын, әрнеүҙәрен тәфсирләп көндәлеккә теркәп барған тағы берәй шағир йәки берәй прозаик бармы икән беҙҙә! Мин белгәндәр араһында ундайҙар юҡ.**



үткәргән И. Тургенев әҫәрҙәрен, француз телен бик яҡшы белһә лә, бары тик рус телендә яҙыуҙы өҫтөн күрҙе. Муса Йәлил Моабит төрмәһендә баш өҫтөндә палач балтаһы торғанда ла шиғри васыяттарын саф татар телендә әйтеп ҡалдырҙы. Сөнки ҡәләм тирбәтеүсенең төп эш ҡоралы - тел, халҡының туған теле. Үҙ ҡоралы тураһында оҫта ҡайғыртмай, кем ҡайғыртһын?

Рәсүл Ғамзатов "Известия" гәзитендә баҫылған бер шиғырында: "Авар теле бөтһә, - мин үләм", - тип яҙып сыҡты. Ә бына Рәми Ғарипов "Туған тел" шиғырын яҙғас, беҙҙә ҡайһы берәүҙәр араһында һағайыу тыуҙы, күңелдәренә шом төштө: нимәгә ишаралай был, йәнәһе һәм китте... Шул заманда Рәми Ғарипов тирәһендә уралып, унан герой яһап, рухландырып йөрөүселәр "ялп" итеп урамдың икенсе яғына сығып йүгерҙе, уға әллә ниндәй ярлыҡтар тағып, "бер ҡыллы шағир", тип үсекләй башланылар. Ә ҡайһы бере арҡаһынан һыйпап һөсләтеүен белде. Ҡырҡыу характерлы шағирға был етә ҡалды. Унының үҙ һүҙен биргеһе килмәне. Оппоненттарына ул "Бер ҡыл" шиғырында ошолай тип яуап бирҙе:

*Ул ҡыл үтеп ингән йөрәгемә*
*Яуҙар, мең ғазаптар арҡылы.*
*Пушкин, Тарас, Туҡай, Сәләмгә лә*
*Изге булған иҫке бер ҡылы.*
*Мәңге яңы ҡартлас, был донъяла*
*Бер йөрәгем типкән сағында*
*Ике йөҙлө, ике һүҙле булмам,*
*Мин торормон бер ҡыл һағында.*
*Туҡһан туғыҙ ялған ҡыл булғансы,*
*Булһын әйҙә ысын бер ҡылың...*

**Хәким ҒИЛӘЖЕВ,**
**Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты.**
**1979 йыл, 14 ноябрь.**

# УНЫҢ РУХИ БАЙЛЫҒЫ

...Рәми үҙенең етенсе ҡаттағы яңы фатирына күсенә. Тәбиғи, лифт эшләмәй. Беҙгә социалистик мебелде, алюмин һауыт-һабаны, ауыр абажурҙарҙы йөкмәп, өҫкә ташырға кәрәк. Быныһы - ярты бәлә. Тоҡтарға, йәшниктәргә тултырылған китаптар ташыуыбыҙ ныҡ хәтерҙә ҡалған. Тоҡтар бөткөһөҙ күп. Яратҡан өлкән дуҫыбыҙҙың ғилемгә мөхәббәтен һүгә-һүгә, китаптарҙың таш һымаҡ ауырлығынан арып, баҫҡыстарға ауып китәбеҙ. Үҙебеҙ көләбеҙ. Бындай бай шәхси китапхананы таныш яҙыусыларҙа осратҡан юҡ ине әле.

Китаптарҙы йәшниктәрҙән, тоҡтарҙан ала башлағас, тағы ла бер яңылыҡҡа иҫем китте: улар, барыһы ла тип әйтерлек, Рәмиҙең ҡаралы ручкалары менән билдәләнеп бөтөлгәйне. Эйе, бөтәһе лә тиерлек! Йөҙәрләгән, меңәрләгән китап. Миллионлап бит. Бына кем Карл Маркстың осҡор әйтемен: "Китаптар - минең ҡолдарым", - тип ҡабатлай алыр ине.

Дөрөҫ, Рәми бер ҡасан да ҡол тимәҫ ине. Ул, моғайын, "Алла" йәки Пушкин һымаҡ "дуҫтарым", тиер ине. Үлеп барғанда Пушкин, үҙенең һуш китерлек китаптарына ҡарап: "Бәхил булығыҙ, дуҫтарым!" - тигән бит.



Рәми ундай һүҙҙәрҙе әйтә алмаған. Ул "Тиҙ ярҙам" машинаһы иртәнсәк алып барып һалған реанимация палатаһында үлгән. Унның ҡулынан ҡәләме төшөп киткән, башын өҫтәл ситенә терәгән.

"Ҡәҙерле яҙыу өҫтәлем минең! Тормошомда тоғро дуҫ, һаҡсы һәм ярҙамсы булыуың өсөн рәхмәтем ҙур!" - был һүҙҙәрҙе Марина Цветаева артынан Рәми ҙә ҡабатлай алыр ине. Ябай ғына итеп эшләнгән яҙыу өҫтәле унның гонаһлы һәм яҡты тормош юлында һәр саҡ бергә булды. Ғүмеренең һуңғы минутында ла башын Рәми уға һалған...

...Һуңыраҡ Мәскәүҙең тәржемәсе шағиры, Рәмиҙең һабаҡташ дуҫы Радий Фиш менән һөйләшергә тура килде. "Рәми теоретик һәм матур әҙәбиәтте беҙҙән күберәк уҡый ине, шуға күрә бөтәбеҙгә ҡарағанда ла илебеҙ әҙәбиәтен һәм сит ил әҙәбиәтен яҡшыраҡ белә торғайны, - тип һөйләне ул. - Бигерәк тә шиғриәтте яҡшы белә ине!" Институтты тамамлағас, Мәскәүҙән Өфөгә студент йылдарында туплаған ҙур китапханаһын алып ҡайтҡан. Кемдер кейем-һалым тейәгән, ә ул - китап.

Мин Рәмиҙең иҫкәрмәләре менән тулған китаптарҙы ҡарайым, мәғәнәләренә төшөнөргә тырышам. Был эште күп тапҡыр ҡабатлайым. Уҡыған китабында автор фекеренә ҡарата үҙенең уйҙарын белдерә барған. Уйлап уҡый торған кеше булған шул Рәми. Ҡайһы бер урында автор менән килешкән, кире ҡаҡҡан, үҙенең идеяларын һәм асыштарын теркәп барған. Үҙенең күңелен, рухын китаптарға түккән. Бигерәк тә көндәлектәрендә унның рухи байлығын күрәбеҙ.

Уй-фекерҙәрен, күңел сыуалыштарын, асыштарын, әрнеүҙәрен тәфсирләп көндәлеккә теркәп барған тағы берәй шағир йәки берәй прозаик бармы икән беҙҙә!

Мин белгәндәр араһында ундайҙар юҡ. Бының өсөн ҙур ихтыяр көсө һәм ойошҡанлыҡ кәрәк. Унан тыш, яҙырлыҡ фекерҙәрең дә булырға тейеш. Идеялар кәрәк. Ә улар һәр кемдә лә юҡ...

**Ғәзим ШАФИҠОВ,**
**Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты.**

# ШАҒИҘАР ЕҢЕЛ ЯҘМЫШЛЫ БУЛМАЙ

...Рәми Ғарипов үҙе ҡыҫҡа ғүмерле булһа ла, оҙон ғүмерле ижад ҡалдырҙы. Рәмиҙең шиғриәте унның үҙенә ҡарағанда күпкә бәхетлерәк булды. Тере сағында ҡағылып-һуғылған шағирҙың шиғриәте хәҙер үҙенең тейешле баһаһын ала бара, унның ысын ҡәҙере арта бара.

Тағы ла шуны әйтергә кәрәк. Рәми Ғариповты әле өйрәнәһе лә өйрәнәһе... Уҡыусылар иғтибар итмәй ҡалмайҙар: йыл һайын матбуғатта унның быға тиклем баҫылмаған шиғырҙары донъя күрә. Бына унның аҙ билдәле бер шиғыры:

*Был кешелек ҡайҙа бара һуң ул?*
*Белһә әгәр ҡайҙа барғанын,*
*Тарихи бер бәхет һанар ине*
*Ярты юлда туҡтап ҡалғанын.*
*Белмәй һаман: үҙен-үҙе алдай,*
*Арта ялған, арта вәхшилек.*
*Аҡыл эшләй аҡылһыҙлыҡ өсөн,*
*Һәләкәтен даулай кешелек.*
*Ер әйләнә шартлап ярылырға...*
*Килһә икән әҙәм ҡулынан,*
*Ул арҡыры сығып ятыр ине*
*Туҡтатырға уны юлынан...*
*Аһ, әйләнәм бер шик ҡолона!*

Шиғыр 1964 йылдың 24 апрелендә яҙылған. Әле донъялар сағыштырмаса һил саҡта, кешелек алдына һәләкәт бөгөнгө кеүек үк ҡот осҡос хәлендә килеп баҫмаған саҡта уҡ Рәми Ғарипов бына ниндәй борсоулы уйҙар менән йәшәгән!

Беҙ шағирҙың нахаҡҡа күргән ауырлыҡтары, уға ғәҙелһеҙ ғәйептәрҙең өйөлгәнлеге тураһында урынлы хәтерләйбеҙ. Ләкин беҙ шуны ла онотмайыҡ: шағир һәр саҡ үҙенә аяуһыҙ булды, ялған менән бер ваҡытта ла килешмәне, бары дөрөҫлөккә табынды. Уға йәшәүе бер ваҡытта ла еңел булманы, сөнки ул еңел-елпе уйҙар менән, ваҡ маҡсаттар менән йәшәмәне, юҡ-бар менән ҡәнәғәт булып, вайымһыҙлыҡҡа бирелмәне.

Шағирҙар, ғөмүмән, еңел яҙмышлы булмай. Уйлап ҡараһаң, ысынында бит улар фажиғәле, трагик яҙмышлы шәхестәр. Шағир һәр ваҡыт үҙ заманы менән бәхәсләшеп, кеше күңеленә, тормоштоң именлегенә янаусы ҡурҡыныстарҙы алдан күреп йәшәй. Шуға ла ул һәр саҡ һыҙлана, шуға ла ул тыныс яҙмышлы, ғәҙәттәгесә бәхетле була алмай...

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Шатлыҡҡа илтеүсе юл

Был бүлектең төп темаһы - шатлыҡҡа эйә булыу. Тап суфыйҙар, бигерәк тә дәрүиштәр быға нисек өлгәшергә икәнлеген яҡшы белгән.

XI быуатта суфыйҙар тарафынан матур образдар аша Аллаһҡа һөйөүҙе күтәргән яңы шиғриәт барлыҡҡа килә. Суфыйҙар, шул иҫәптән Кваджаган да акцентты Аллаһтың кеше аңына аңлайышһыҙ булыуынан унның ябайлығы файҙаһына яһаған.

Кваджаган башҡалар кеүек билдәлелек яуламаған. Теология мәктәбендә белем биреүсе Әл-Ғазали стеналары артынан бик күп суфыйҙар сығыуға булышлыҡ иткән мәктәптәрҙе булдырыуҙа һәм уларҙы тотоуҙа ҙур роль уйнаған. Был изгеләр үҙҙәренең мистик философик ҡараштары һәм аҡыллы фекерҙәре аша билдәлелек яулаған.

Беҙгә, яҡшыраҡ тормош эҙләүселәргә, боронғо мәҙәниәттәрҙән күп нәмәгә өйрәнергә кәрәк. Цивилизацияның тормошобоҙҙоң барлыҡ өлкәләренә лә үтеп инеүе һөҙөмтәһендә матди тормош беҙҙе быҒаса бер ҡасан да булмағанса Аллаһтан алыҫлаштырҙы.

Һеҙ ҡасан да булһа үҙ-үҙеңә ярҙам итеүсе һөҙөмтәле программала ҡатнашҡанығыҙ булдымы? Ул һеҙгә уңыш, ауыр хәлдән лайыҡлы сығыу ғына түгел, енси тормошоғоҙҙо яҡшыртыу, яңы ризыҡ татып ҡарау мөмкинлеге биреү, үҙ-үҙең менән гармония табыуға килтереү, яңы шатлыҡтар, ситтәр яғынан ихтирам килтереү һәләтенә эйә. Мин быны яҡшы беләм, сөнки үҙем шуны кисерәм.

Суфыйҙар белемдең иң көслө сығанағы булып интуиция тороуын белгән. Нимә һуң ул интуиция? Ул эстән килгән тауыш, Аллаһ менән бәйләнеш. Һеҙҙең уҡытыусығыҙ мин түгел, ә Аллаһ.

Шатлыҡтан мәхрүм итеүсе яуыздар ҙа бар. Бына һеҙ тормошоғоҙға шатлыҡ индереп, һеҙ унның ҡайҙан килгәнен беләһегеҙ. Белем һәм шатлыҡ сығанағынан да көслөрәк ҡеүәтле сығанаҡ юҡ.

Әммә һеҙҙең тормошоғоҙҙа аҫтыртын ғына килеп, үҙенең ҡара эшен эшләүсе фактор ҙа бар. Ул шатлығығыҙҙы ғына урлап ҡалмай, энергияғыҙҙы һура, асылышығыҙға аяҡ сала, йәшәү дәртен һүндерә.

Был яуыз - стресс.

Әгәр стресты танырға һәм уны контролдә тоторға өйрәнһәгеҙ, быға тиклем программалаған бөтөн нәмәлә лә ныҡ алға китербеҙ. Һеҙ ыңғайыраҡ һәм оптимисыраҡ булырһығыҙ, шәхси сифаттарығыҙҙы яҡшыртырһығыҙ, туғандарығыҙ һәм дуҫтарығыҙ һеҙгә яҡшыраҡ мөнсәбәт күрһәтер. Тормошоғоҙ яҡшы яҡҡа үҙгәрер.

Стресс үҙе тураһында һиҙҙермәй. Оҙайлы йәки көслө стресҡа бирелгәндә ҡыңғырауҙар ҙа саң ҡаҡмай, сиреналар ҙа ҡысҡырмай. Әммә нервыларығыҙ ҡаҡшай, ҡан баҫымығыҙ күтәрелә, тирә-яҡтағыларға көн күрһәтмәй башлайһығыҙ, иммунитетығыҙ ҡаҡшай, тормошоғоҙ кирегә тәгәрәй.

Стресс беҙҙе һәр ерҙә һағалай. Хатта унның сәбәбе булып һауа торошонон үҙгәреүе лә торорға мөмкин. Әммә стрестың ыңғай яҡтары ла бар. Был хаҡта - киләһе һанда.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 14 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Карина Красная". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Холодные берега. Возвращение". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине.
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Родина". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 20.45 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00, 5.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Мы и я". [16+]**
**3.00 "Шаймуратов генерал". [12+]**

## 15 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.15 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.15, 15.30 Т/с "Карина Красная". [16+]
13.55 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Биатлон. Мужчины. 4х7,5 км. Эстафета.
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.40 "60 минут". [12+]
21.20, 22.30 Т/с "Холодные берега. Возвращение". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине.
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Родина". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 3.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Хазина". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Д/ф "Дорогие мои, шурави". [16+]**
**0.45 Х/ф "Только представь!" [12+]**
**3.45 Спектакль "Моя звезда". [12+]**

## 16 ФЕВРАЛЯ СРЕДА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 15.30, 20.00 Вести.
11.15 Т/с "Карина Красная". [16+]
12.45 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Лыжные гонки. Биатлон. Женщины. Эстафета 4х6 км. Мужчины / Женщины. Командный спринт. Квалификация.
15.55 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Лыжные гонки. Мужчины / Женщины. Командный спринт.
17.20 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.45 "60 минут". [12+]
21.20, 22.30 Т/с "Холодные берега. Возвращение". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине.
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Родина". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Летнее время". [16+]**
**3.00 "Суд матери". [12+]**
**4.45 История одного села. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 17 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 19.10 "60 минут". [12+]
14.00 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
15.00 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Фигурное катание. Женщины. Произвольная программа.
21.20, 22.30 Т/с "Холодные берега. Возвращение". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине.
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Родина". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Гении". [12+]**
**2.45 "Земляки". [12+]**
**4.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 18 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 13.00, 16.00, 20.25 Вести.
11.30, 16.30 "60 минут". [12+]
13.55 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Биатлон. Мужчины. Масс- старт 15 км.
14.55 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
18.00 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Хоккей. Мужчины. Полуфинал.
21.25 "Возможно всё!" [16+]
23.25 Х/ф "Бендер. Золото империи". [16+]
1.10 Х/ф "Вернуть Веру". [12+]
2.40 Х/ф "Везучая". [12+]
4.13 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/ф "История воздушных таранов". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 4.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 23.00 Автограф. [12+]**
**14.00 Д/ф "Живая вода". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Форс-мажор". [18+]**
**2.30 Спектакль "Бәндәбикә һәм Ерәнсә Сәсән". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [12+]**
**5.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 19 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 Формула еды. [12+]
8.55 Сто к одному.
9.45 Вести.
10.00 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
10.55 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Лыжные гонки. Мужчины 50 км. Масс-старт.
13.55 Х/ф "Везучая". [12+]
16.00 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Фигурное катание. Пары. Произвольная программа.
19.10 Привет, Андрей! [12+]
21.10 Вести в субботу.
22.10 Х/ф "Бабуля". [12+]
1.50 Х/ф "Счастливая жизнь Ксении". [12+]
5.03 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Д/ф "Уравнение судьбы". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Х/ф "Радуга над деревней". [12+]**
**19.00, 4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00 Х/ф "Мадам Бовари". [12+]**
**3.15 Спектакль "Матери ждут сыновей". [12+]**
**5.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 20 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### РОССИЯ 1

5.45 Х/ф "Я буду рядом". [12+]
7.30 Утренняя почта с Николаем Басковым.
8.10 Сто к одному.
9.00 XXIV Зимние Олимпийские игры в Пекине. Фигурное катание. Показательные выступления.
11.30 Вести.
12.00 Парад юмора. [16+]
14.05 Х/ф "Послушная жена". [16+]
17.50 Танцы со звездами. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30, 3.10 Х/ф "Частный детектив Татьяна Иванова". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Д/ф "Выбор есть всегда". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Сулпылар". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Ай текә". [6+]**
**11.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.45 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Х/ф "Ловец ветра". [12+]**
**18.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**19.00 Лидеры региона. [12+]**
**19.30 Песни композитора, народного артиста РБ Нура Даутова. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 3.15 Х/ф "Проект "Динозавр". [12+]**
**1.00 "Страна Айгуль". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**15 февраль "Эҙләнем, бәғрем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+
**16 февраль "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+
**17 февраль "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 16+
**18 февраль "Әбейүшкә@ эт тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 12+
**19 февраль "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+
**20 февраль "Бомба"** (С. Әбүзәр), комедия-фарс. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 февраль "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим). 12+
**19 февраль "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 18.00 16+
**20 февраль "Арба"** (Зөһрә һәм Таңсулпан Бураҡаевалар), әкиәт. 12.00 6+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**14 февраль "Шаңдau"** концерт. 6+
**19 февраль "Яратам тип йырлаһам"**, "Феста" вокаль ансамбле концерты. 18.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**14 февраль "Әллә яңылыш, әллә яҙмыш"** (Т. Миңнуллин), трагикомедия. 16+
**15 февраль "Волшебная лампа Аладдина"** (Л. Ниғмәтуллина), әкиәт. 0+
**16 февраль "Game over. Конец игры"** (З. Сөләймәнов), йәштәр өсөн социаль драма. 14.00 12+
**19 февраль "Дюймовочка"** (Г.Х. Андерсен), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**15 февраль "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович инсц.), драмаһы менән М. Ғафури ис. БАДТ. 16+
**17 февраль "Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Сәлихов), комедия. 12+
**18 февраль "Атты ектем! Айға осам..."** (В. Шукшин), ауыл комедияһы. 12+
**19 февраль "Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+
**20 февраль "В поисках утраченного волшебства"** (М. Хейфец), әкиәт. 12.00 0+
**"Хушығыҙ, хыялдарым"** (Ә. Атнабай), драма. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**19 февраль "Про Ерему, Данилу и нечистую силу"** (А. Хайт, В. Савельев), әкиәт-мюзикл. 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Февраль (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (13) дүшәмбе | 7:12 | 8:42 | 13:30 | 16:28 | 18:18 | 19:48 |
| 15 (14) шишәмбе | 7:10 | 8:40 | 13:30 | 16:30 | 18:20 | 19:50 |
| 16 (15) шаршамбы | 7:08 | 8:38 | 13:30 | 16:32 | 18:22 | 19:52 |
| 17 (16) кесе йома | 7:05 | 8:35 | 13:30 | 16:34 | 18:24 | 19:54 |
| 18 (17) йома | 7:03 | 8:33 | 13:30 | 16:35 | 18:26 | 19:56 |
| 19 (18) шәмбе | 7:01 | 8:31 | 13:30 | 16:37 | 18:29 | 19:59 |
| 20 (19) йәкшәмбе | 6:59 | 8:29 | 13:30 | 16:39 | 18:31 | 20:01 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# РӘМИ ҒАРИПОВТЫҢ ТЫУЫУЫНА - 90 ЙЫЛ

**5.** Йыуанаһың оло өмөт менән,
Бәйгелә бит хаҡлыҡ еңәсәк.
Унда ир намыҫы, ат бәҫе бит,
Ә хакимы уның - (...).
**6.** Ир-егеттең яуға китеүҙәрен.
Уҡ-һаҙағын аҫып, ҡалъянын,
Һөйләһә тик һөйләр (...) ғына,
Һөйләй алмаҫ уны тальяның.
**7.** (...) балаларын
Йырлап-йырлап сығара.
Балаларын таратҡанда,
Илап сәсе ағара...
**8.** (...) - һәр саҡ һуңлап килер ҡунаҡ,
Килеп инә табын таралғас!..
**9.** Тәбиғәттә бер ни ҡалмай эҙһеҙ:
Ҡаяларға елдәр эҙ һала,
Ташҡа һыу эҙ һала.
Атҡан (...)тар ҡала.
Тик кешенең төҫөн-һынын,
Тик кешенең тауышын
Һаҡлай алмай тәбиғәт...
**10.** (...) яҡлай ғәҙелһеҙлек,
Халҡымдан көлгән өсөн.
Мине ҡаға ғәҙелһеҙлек,
Халҡым тип үлгән өсөн.
**11.** Алдаҡ менән кеше ни һуң ота?
Күпме генә хәсрәт етмәһен,
Мин һаман да әҙер алданырға,
Тик (...) ҡына бөтмәһен.
**12.** Тупрағыма тубырсыҡтар яуһа,
Мин донъяға тағы ҡайтырмын.
Мәңге йәшел бейек (...)ҙың
Тамырҙарын тотоп ятырмын.
**13.** Заманына - һәр кем(...),
Ҡабатлай заман холҡон:
Күтәрәм мин бөтәһен дә,
Күтәргән кеүек халҡым!
**14.** Ә ул сәләм Ҡыҙыл майҙандағы
Илем йөрәгенең үҙенән.
Ул йөрәкте (...) ҡат һиндә күрҙем
Уҡытыусымдың йылы һүҙенән.
**15.** Тыуған ерһеҙ, һөйгән йәрһеҙ -
Телһеҙ, мин (...).
Тыуған ерем, һөйгән йәрем,
Тик һеҙ - бәхетем.
**16.** Һин көс булып,
Һин (...) булып,
Хис уяттың, уйҙар уйлаттың.
Юлдарыңда күпме ҡорбан ятты,
Юлдарыңда күпме ҡан аҡты!..
Әй, ҡыйыу һүҙ,
тере буяу
саф моң!
Онотмайыҡ изге ҡаныңды.
**17.** Бына инде мин дә үлдем бит,
Төшөп китте ҡулдан (...)ем.
Башҡа йәштәр ҡулға тотоп алды
Минең йәшлегемдең әләмен.
**18.** Ҡуй, илама, ҡыҙый, һин ҡурҡҡан,
Һин ҡырҡҡан Ҡырҡты тауың бар.
Таш ҡулдарын (...) тулҡын итеп,
Үткәнеңде йыуыр таңың бар...
**19.** Көнбағыштар алтын табаҡтарын
Баҡса (...) миңә һоналар.
Бер үрелеп ҡулым һуҙыу була,
Һабаҡтары шартлап һыналар.
**20.** Төрлө (...), төрлө юрауҙарға
Ышанһа ла хатта күңелең,
Ул ҡушҡайын бер йыр булып ҡалыр,
Тик үткән юл ҡалмаҫ күмелеп.
**21.** Ә бит (...)ға нисә быуат буйы
Хужа булып килде шағирҙар!
Һәм (...) тураһында һүҙ әйтмәгән
Бер шағир ҙа юҡ шай был ерҙә?
**22.** Ауыҙ тулы ҡара ҡан булһа ла,
Төкөрмә тип (...) алдында,
Нисә ҡабат әсәм әйткәне бар,
Онотам шул шуны ҡапылдан...
**23.** Был донъяла бер йыл оҡшамаһын
Утыҙ етенсе йыл ишегә,
Бер (...)ға кеше табынмаһын,
Табынһын тик кеше кешегә...
**24.** Күңел үлгән, күңел төңөлгән дә
Тере (...)тәр күптән күмелгән.
Бер ниндәй көн, бер ниндәй төн хатта
Серле уйҙар һалмай күңелгә...
**25.** (...) икән аҡылым,
Бирмәмҡош ул - йөрәк ялҡыным.
Ғүмер буйы улар алыша,
Ғүмер буйы улар тартыша.
**26.** Эс бошорғос талғын сәғәт теле
Нисә ҡабат инде ураны!..
Уйҙарымдың моңһоу ебен һүтеп,
Үкһей тышта февраль (...)ы.
**27.** Был кешелек ҡайҙа бара һуң ул?
Белһә әгәр ҡайҙа барғанын,
Тарихи бер бәхет һанар ине
Ярты (...) туҡтап ҡалғанын.
**28.** Нан да һин миңә,
(...) да һин миңә,
Дан да һин миңә,
Ҡан да һин миңә.
**29.** Йөрәгеңде ус төбөнә тотоп,
Ҡырлас ҡаяларҙың аҫтынан
Һыбай үтеү - үҙе бер ғүмер бит:
Елеп осҡан ҡошто яҫҡынған
Бөркөт һымаҡ той ҙа һин үҙеңде,
Боҫобораҡ (...) ҡашына,
Ҡыҫыбыраҡ тотоп теҙгенеңде,
Яҙа баҫмай ҡая ташына, -
Ҡотороноп, шаулап, өйөрөлөп
Сыйҙым киткән йылға өҫтөнән, -
Ҡыл күперҙән сығам тиһәң дә, -
Бер ҙә ҡурҡмаған төҫ менән
Сыҡ та кит һин, әйҙә, тын да алмай!..
**30.** (...) та илай.
(...)тың күҙ йәштәре
Ергә таммай,
Оса күктәргә.
**31.** (...) сәпсеккәй осоп килде лә шул,
Аҡтарылып, шаулап боҙ китер;
Аҡтарып та алып йөрәгемде,
Артҡайынан туйлап ҡыҙ китер.
**32.** Ҡысҡыра хан, йәйеп ҡоласын:
- Хан түгел мин һеҙгә бөгөндән!
Сит илдәрҙә (...) булғансы
Булайым, - ти, - олтан илемдә!..
Иртән иртүк томан таралғас,
Тау баштары сумғас баҡырға,
Хан, хушлашып, атҡа атланғас,
Каруандар сыға ҡайтырға.
**33.** Китһә лә (...),
Ҡалдырған Ватан.
Шул Ватан тиеп
Башымды ватам.
Уттарҙа янам,
Һыуҙарға батам,
Эштәрен уйлап
Йоҡоһоҙ ятам.
Бар байлығым һин,
И ғәзиз Ватан.
Шул байлыҡ өсөн
Ҙур рәхмәт, (...)!..
**34.** Ярай әле йырҙар тыуған,
Был донъяға (...) биреп,
Дәртһеҙҙәрҙе дәртләндереп,
Ғәмһеҙҙәргә ғәм биреп.
**35.** Ул ҡояшҡа ҡарап туҡтап ҡалды,
Күрҙем уның хайран булғанын:
Ике ҡулын елкәһенә ҡуйып,
Һемерҙе ул ҡояш (...)ҙарын.
**36.** Мин яратҡан (...)ҙы иҫеректәр
Боҙоп китһә үкереп урамда,
Минең өсөн ул (...) үлеп ҡала,
Үлеп ҡала туңып буранда.
**37.** Үтһә үтһен (...) әйҙә,
Тик мөхәббәт кенә үтмәһен.
Бер үҙемде яңғыҙлыҡҡа
Мәңгелеккә ташлап китмәһен.
**38.** Ҡасандыр бер башҡорт (...)
Диңгеҙҙәй йәйрәп ятҡан.
Уйҙым-уйҙым утрау уйып,
Ул хәҙер инде ҡайтҡан.
Ҡайтһа ла ул ярҙарына,
Ҡалған утрауҙары.
Ҡалған алтын һүҙкәйҙәре,
Ҡалған көмөш йырҙары...
**39.** Башҡорттар ҙа үлеп бөтәләр,
Тигән бер шомло һүҙ ҙә үлә.
Үҙ халҡым минең дә терелә,
(...) елә, (...) елә, (...) елә.
**40.** Комсомолдар йәнде игәй,
Ҡуян да ҡуян, тиеп.
Уяу йөрөгән кешегә
(...) да (...), тиеп.
**41.** (...) тыуҙырған халҡым -
бөйөк бер(...)!
(...)е үлмәҫ, үҙе үлмәһә.
Үҙе үлмәҫ, күрер киләсәкте,
Үҙен үҙе ергә күммәһә!..

**Йәшерелгән һүҙҙәрҙе табып, дүшәмбе сәғәт теүәл 11-ҙә (347) 253-25-44 телефон номерына шылтыратып, дөрөҫ яуапты беренсе булып әйтеүсегә Ә. Әсфәндиәровтың "История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий" китабын бүләк итәбеҙ.**




**3-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Кәрим. Абрикос. Кадет. Иғлан. Эркет. Иҙеүкәй. Ғүмер. Әкиәт. Шәмәхә. Клише. Баш. Төймә. Имза. Виза. Бурыл. Алҡа. Күркә. Ҡәлғә. Ғибәҙәт. Сейәлек.

**Вертикаль буйынса:** Ғәскәров. Исмәғилев. Рогервик. Аҡса. Үҙағас. Ницше. Көрәк. Бланк. Әңгәмә. Дәүләтшина. Лилиә. Мәсет. Төк. Эйә. Табаҡ. Көбө. Әрем. Тут. Әүлиә.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

✓ *"Тамашала Рәми Ғарипов исеменән әйтелгән һәр һүҙ минең тойғоларым, эске донъямдағы кисерештәрем менән тап килә. Эстән шулай уҡ телем, халҡымдың киләсәге, тип янам..."*



*МИНЕҢ РӘМИ*

# ШАҒИР ДОНЪЯҺЫНА СӘЙӘХӘТ





**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында бынан ун йыл элек Рәми Ғариповтың 80 йыллыҡ юбилейына арнап, "Февраль. Буран..." спектаклен сәхнәгә сығарҙыҡ. Ул ошо йылдар буйына Шағирҙың тыуған көнөндә һәр йыл ҡабатлап уйнала килде. Кисә, 11 февралдә лә, Рәми ағайҙың 90 йыллыҡ юбилейына арнап, спектакль тамашасыларға тәҡдим ителде.**

...Хәтеремдә, бер көндө Гөлли Арыҫлан ҡыҙы Мөбәрәкова: "Быйыл Рәми Ғариповтың 80 йыллыҡ юбилейы, уның ижады хаҡында шиғри кисә үткәреү тәҡдимемә нисек ҡарайһың?" - тип һораны. Мин уның тәҡдимен хупланым һәм Рәми ағайҙың шиғырҙарын һайлап алып, артистарға бүлеп бирҙек, эш башланыҡ. Ә шулай ҙа ниҙер етмәгән һымаҡ ине. Икеләнеүемде Гөлли Арыҫлан ҡыҙы менән уртаҡлаштым: "Рәми Ғариповтың юбилейына арналған кисә тип иғлан иткәс, тамашасы сәхнәлә бары бер Рәми Ғариповтың һынын, образын күрергә теләйәсәк. Сөнки сара театр сәхнәһендә үтәсәк бит", - тим. Гөлли Арыҫлан ҡыҙы был фекер менән ризалашты. Зөһрә Бураҡаеваны, Рәми ағайҙың ҡыҙы Гөлнараны саҡырып, өсәүләп ултырып ниндәйерәк йүнәлештә эшләргә кәрәклеген хәл иттек. Рәми ағайҙың ижадын һәм биографияһын яҡшы белгән кеше булараҡ, Зөһрә Бураҡаева ҡыҫҡа ваҡытта ҙур күләмле сценарий яҙып алып килде. Уны ыҡсымлатып, бер формаға килтерҙек. Шундай билдәле шәхес тураһында спектакль ҡуйыуҙың яуаплылығын тойоп эш иттек...

Премьераға тиклем ун көн алдан уҡ кассала билеттар һатылып бөткәйне.

Ә премьера көндө залда алма төшөрлөк тә урын булманы. Тамашала Рәми ағайҙың гәүһәр бөртөгөнә тиң шиғырҙары, аяныслы тормош юлы хаҡында күренештәр, уның һүҙҙәренә яҙылған йырҙар яңғыраны. Артур Кәбиров башҡарыуында композитор Илшат Яхин яҙған "Минең йондоҙом" йыры ғына ла ни тора! Ул хәҙер йәштәрҙең яратҡан хитына әүерелде. Яҙыусыларҙың тамаша залын тултырып килеүе һәм спектаклдә бик эмоциональ ҡарауы, ҡул сабыуҙар, көсөргәнешле мәлдә күрһәнеүҙәр, күҙ йәштәре менән оҙатылып барыуы хәтергә уйылып ҡалды. Спектакль тамамланып, артистар баш эйгәндән һуң спектакль тәьсиренән тамашасылар берәм-берәм сәхнәгә сығып: "Рәмиҙе ҡайтарғанығыҙ өсөн рәхмәт!" - тип артистарҙы алҡыштарға һәм сәскәләргә күмде. Шаршау ябылғас, Рәми ағайҙың балалары һәм оло йәштәге тамашасылар сәхнә артына эркелде.

Рәми ағайҙы шәхсән күреп белеүселәрҙе таң ҡалдырған бер факт тураһында әйтергә теләйем. Ул да булһа - Рәми Ғарипов ролен башҡарыусы Артур Кәбировтың һәм Надя Ғарипова ролен башҡарыусы Ирада Фазлаеваның үҙ геройҙарына тышҡы булмыштары, ҡиәфәттәре менән ныҡ оҡшаш булыуы. Хәйер, был оҡшашлыҡ рух уртаҡлығынан да киләләр: "Тамашала Рәми Ғарипов исеменән әйтелгән һәр һүҙ минең тойғоларым, эске донъямдағы кисерештәрем менән тап килә. Бәлки, мин үҙ фекерҙәремде улай асыҡтан-асыҡ әйтә лә белмәйемдер, әммә эстән шулай уҡ телем, халҡымдың киләсәге, тип янам", - ти бит Артур үҙе лә.

Был тамаша, дөйөм алғанда, театрыбыҙҙың оло ағайыбыҙ рухы алдында баш эйеүе булды. Артистарыбыҙҙың һәр ҡайһыһының тамашаны күтәреү өсөн ҙур тырышлыҡ һалыуы, шағирҙың ижадын һәйбәт белеүе һоҡландырҙы хатта. Бигерәк тә йәш быуын өсөн әһәмиәтле спектакль килеп сыҡты. Ябай ғына ауыл малайының ни тиклем маҡсатҡа ынтылышлы булыуы, ҙур теләк-ынтылыштар менән янып йәшәүе һәм, ахыр килеп, шиғырҙары телдән төшмәгән оло шағир дәрәжәһенә күтәрелеүе - ниндәй һоҡландырғыс өлгө бөгөнгө йәштәргә. Рәми Ғарипов - башҡорт мәҙәниәтендә айырым бер күренеш. Уның ижады ла, шәхесе лә, яҙмышы ла, шиғырҙары ла - барыһы ла уникаль.

Әйткәндәй, был юлы Шағир ролен Фирғәт Ғарипов урынына Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Артур Ҡунаҡбаев башҡара. Артур Булат Йосоповтың фильмында ла Шағир ролен уйнай, актер Рәми Ғариповтың тормошон да, ижадын да яҡшы белә, шуға күрә спектаклдә Рәми Ғариповты кем уйнаясағына бер ниндәй ҙә шик булманы.

**Хөрмәт ҮТӘШЕВ,**
**Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы,**
**С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты.**

*ЯҢЫ КИТАП*

## ТАМБУРЛЫ СИГЕҮ



**З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә әряңы китап донъя күрҙе. Рус телендәге баҫма "Магия башкирского тамбура" тип атала, авторы - техник фәндәр кандидаты Айгөл Камалиева. Баҫма тыуған яҡты өйрәнеүселәр, тикшереүселәр, дизайнерҙар һәм киң ҡатлам уҡыусылары өсөн тәғәйенләнгән.**

Башҡорт сәнғәтендә тамбурлы сигеү - туҡымаларҙы декоратив эшкәртеү буйынса боронғо алым. Был сигеүҙең иң киң таралған төрө. Башҡорт тамбурына традицион элементтар ҡатыш сәскәле-үсемлекле орнамент хас, сигеүҙәрҙә сәскә, емеш суктары, үсемлек һабаҡтарының сағылышы күренә. XIX быуат уртаһына тиклем сигеү өсөн төп материал булып йорт шарттарында етештерелгән туҡыма хеҙмәт итһә, XIX быуаттың икенсе яртыһынан - кизе-мамыҡ һәм ебәк туҡымалар ҡулланыла башлай. Энә һәм ырғаҡ ярҙамында, киргегә ҡуйып та ҡайыйҙар. Бөгөн бындай сигеү өлгөләрен Башҡортостан Республикаһының Балаҡатай, Ҡыйғы, Мәсетле, Салауат райондарында, Пермь крайының Барҙы районында, Силәбе өлкәһенең Наҙы-Петровск районында, Свердловск өлкәһенең Красноуфимск һәм Түбәнге Серге райондарында табырға була.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ИЛДӘН БИҘҘЕРГӘН ДӘ - МАЛ, йыһан гиҙҙергән дә - мал

Ирен яманлаған ҡатындан биҙ, ҡатынын яманлаған ирҙән биҙ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Сәйәсәттә, грамматикалағы кеүек, барыһы ла бергә ебәргән хатаны ҡағиҙә итеп алалар.

**(Андре Мальро).**

Ялған менән хәҡиҡәт араһында... ниндәйҙер кешелеклерәк урталыҡ бар.

**(Доминик Опольский).**

Ни генә тиһәң дә, донъяла ышанырлыҡ нәмәләр бар әле. Мәҫәлән, бер генә реклама клибы ла насар тамамланмай бит.

**(Роберт Орбин).**

Шәкәр һәм емеш-еләк өҫтәһәң, хатта хыялдан да варенье яһап була.

**(Станислав Лец).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Илдә енәйәтселек, боҙоҡлоҡ күп булыуына зарлана икән бер егет. Халыҡты нисек итеп тәртипкә күндерергә тип баш вата икән. Ошо һорау менән бер аҡһаҡалға барған был. Аҡһаҡал унан һорай икән: "Ә боҙоҡлоҡ ҡылған кешегә иң ҡаты яза ни була, тип уйлайһың һуң?" "Үлемдер, моғайын" , - ти егет. "Юҡ, улым, үлем түгел, - ти аҡһаҡал, киреһенсә, ҡартайып, бер кемгә кәрәген булмайынса, үлә алмай йөрөү иң яманы", - ти икән аҡһаҡал. "Һуң, ул енәйәт ҡылған боҙоҡ әҙәмдәр башлыса йәштәр бит, уларға нисек бындай яҙаны бирәһең?" "Хоҙай Тәғәләнән бер йәш енәйәтсене ғибрәт өсөн ҡартайтып, үлә алмай йөрөгән бер өрөккә әйләндереүен һора", - ти икән аҡһаҡал. - Тик был ғәмәлде бар халыҡ алдында ҡылдырырға кәрәк. Һора шуны Хоҙайҙан", - ти. Егет ышанырышанмаҫ ҡына халыҡты йыя, бер иң яман енәйәтсене тотоп килтереп, халыҡ алдына баҫтыра ла, үҙенең хөкөм ҡарарын иғлан итә: "Был бик күп енәйәттәр ҡылған, бик күп кешеләрҙең ҡарғышын алған әҙәм хәҙер һеҙҙең күҙ алдында бер кемгә кәрәкмәгән, үлә алмаған ҡартҡа әйләнһен", - ти. Һәм ни мөғжиза! Йәп-йәш егет халыҡтың күҙ алдында һөйкөмһеҙ бер ҡартҡа әйләнә. Үҙенең был хәлен күргән егет йүгереп барып упҡынға ырғый, ләкин унан тағы ла ҡот осҡосораҡ, имгәнгән, яраланған йән эйәһе булып килеп сыға. Шунда ул үҙенең үлә алмай, бер кемгә лә кәрәкмәгән ләғнәтле йән эйәһе булып йөрөйәсәген, шундай хөкөмгә дусар ителеүен аңлай. Был хәлде күргән халыҡ тәүбәгә килә. Ошо хәлдән һуң был илдә бер енәйәт тә ҡылынмай, ти."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22006

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
11 февраль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 173